*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*




*А.Вәсилов һүрәте*

Дауамы. Башы 5-се һанда

## Генерал-губернатор Неплюев

Ырымбур крайының генерал-губернаторы Иван Иванович Неплюев йомшаҡ түшәгендә байтаҡ йыбанып ятты. Ниңәлер тәндәре ҡыйралған, хәле юҡ ине оло түрәнең. Ауыртыныуҙарын онотор өсөнмө, нисектер, йәш саҡтарын, данлы юлдарын уйлап, хыялға бирелде. Новгородтан дворян заты, Петербургка килеп, Диңгеҙ академияһын тамамланы. Венеция, Испания академияларында белемен камиллаштырыуын дауам итте. Оло караптарға ултырып, диңгеҙҙәрҙә, океандарҙа йөҙҙө, күпме ил-ерҙәргә сәйәхәт ҡылды. Диңгеҙ һауаһын һулап, белем туплап, алыҫ ярҙарҙы ҡыҙырып ҡайтҡас, бирһә Хоҙай бирә бит, Петр Беренсе батша ҡаршыһында имтихан тотоп, батша ауыҙынан маҡтау һүҙе ишетте. Уға ҙур түрәлек, диңгеҙ юлдары, оло порт ҡапҡалары шар асыҡ ине. Теләгәнеңде һайла. Император ғәли йәнәптәре тәкдиме менән Санкт-Петербургка, диңгеҙ караптары төҙәлөшөнә тәғәйенләнде. Артабан карьераһы гел ҡоро ерҙә ҡалып, Төркиәлә ун дүрт йыл илсе булды. Яҡшыһын да, яманын да күрҙе. Төрөктәрҙе башта Рәсәй ҡеүәте менән өркөтөп ҡараны. Уныһы килеп сыҡмағас, хәйләләр, интригалар ҡорҙо. Йылы урындарҙа ултырып, шымарып алды. Төркиә менән хәлдәр ҡатмарлашҡас, Рәсәйгә ҡайтты. Киев губернаторы итеп ҡуйылды.

Бөлгән дворян улы, ҙур түрәлегенән файҙаланып, Украинала үҙенә бик күп биләмәләр, крепостнойҙар эләктерҙе, эре помещикка әйләнде. Тәхеткә Петр Беренсенең ҡыҙы Елизавета Петровна килгәс, Киев наместнигының йөҙөнә һалҡын елдәр бәрҙе. Губернаторлығынан осто. Канцлер Остерман менән әшнәлеге, немец Брауншвейгтар династияһы менән ҡуштанлығы өсөн үҙен тотоп төрмәгә яптылар, бар биләмәләрен, мөлкәттәрен тартып алдылар. Хатта Александр Невский орденынан мәхрүм иттеләр. Оҙаҡламай аҡланылар, төрмәнән сығарҙылар, хатта күпмелер мөлкәтен кире ҡайтарҙылар.

Яңынан наместник итеп тәғәйенләнеләр Неплюевты. Тик элекке урыны Киев губернаһына түгел, алыҫҡа — Ырымбур далаларына. Вазифа ҡайтарыу түгел, һөргөн бәрәбәре ине был.

Ул баш булған губерна Волга ярҙарынан ҡыр-ҡаҙаҡ далалары эсенәсә, Иртыштан Каспий диңгеҙенәсә, Тубылдан Ташкентҡаса йәйелеп ята. Шунса край менән, йөҙ төрлө ырыу-халыҡ менән идара итеп ҡара...

Губернатор шулай уйланып ятҡанында, алғы бүлмәлә ниҙер ҡыштыр-ҡоштор килде. Лакейы инеп, ҡулына һурғыслы конверт һондо.

– Әфәндем, Верхнеуральскийҙан ашығыс сапҡын. Һеҙгә депеша, – тине. Губернатор яҙыуға күҙ йүгертте. Ҡатлап уҡыны. Төҫө боҙолдо, ағарынып китте. Ҡалтырана башланы хатта.

– Ни булды, йәнем? Ниндәй хәбәр? – тип аптырап өндәште ҡаршыһындағы ҡатыны Анна Ивановна.

– Бунт! Башҡорттар Брагин командаһын һуйғандар. Сапсал станын туҙҙырғандар, – һикереп торҙо Иван Иванович. Лакейына ярһып ҡысҡырҙы: – Мундирҙы килтер! Йәһәтерәк!

Бары аяҡҡа баҫты. Һанаулы минуттар үтеүгә генерал-губернатор үҙ эш бүлмәһендә ине инде. Керә-инешләй үк кәрәк кешеләрен саҡырырға бойорҙо. Киң өҫтәле артына инеп, креслоһына ултырып алған Неплюев уҡалы-суҡлы генерал мундиры, түшендәге Александр Невский ордены, башындағы паригы, ҡырыҫ йөҙө менән хәтәр генерал-губернатор ҡиәфәтенә ингәйне. Тәүге ҡаушауы үткән, ҡалтырауы бөткән төҫлө. Асыуынан йөҙө һытыҡ, ҡаштары емерек. Улары таушалған битте йәнә йәмһеҙләй.

Донъяһы емерелгәндә ҡул һәлендереп ултырыр саҡ түгел, саҡырған кешеләре килеп етмәҫтән секретары Иван Коптяжовҡа Шишмә драгун полкы командиры полковник Исаковҡа хат яҙырға ҡушты. Еткерәһен үҙе әйтеп торҙо.

Ырымбур коменданты бригадир Бахметьев килеп инде.

– Ваше превосходительство, һеҙҙең бойороҡ буйынса килеп еттем! – тип офицерҙарса рапорт бирҙе.

— Ултырығыҙ, бригадир, — Генерал-губернатор үҙен тыныс һәм рәсми тоторға тырышты. — Верхнеуральскийҙан депеша бар. Башҡорттар бунт ҡубарған. Брагин командаһын һуйған, Сапсал станын туҙҙырған. Әлегә мәғлүме шул. Фетнәне, башкиҫәрҙәрҙе тиҙерәк тотмаҡ, ауыҙламаҡ кәрәк. Шишмә драгун полкы командиры подполковник Исаковҡа депеша яҙылды, бола урынына поход сығырға ордер әҙерләнде. Хәҙер сапҡын китер. Край яу хәлендә. Бунт баҫтырыу эше һеҙгә тапшырыла. Бөгөн үк үҙегеҙгә Воздвиженский крепосына китергә. Верхнеярицкий крепосы менән бәйләнеш урынлаштырырға, ике яҡтан ҡамауҙы тиҙләтергә! Әҙерләнергә, бригадир! Юлға сыҡҡансы яҙма бойороҡ, ордерҙар әҙер булыр!

— Есть, Ваше превосходительство!

Генерал-губернатор бүлмәһенә саҡырылғандарҙың береһе инде, икенселәре сыҡты, йомошсолар йүгереп торҙо. Губернатор йорто хәрби штаб төҫө алды. Губерна башында, губернатор ҡул аҫтында юҡҡа ғына хәрби кешеләр тормай ине шул. Губерна халҡын ғәскәр, ҡорал менән генә тотоп тороуҙы улар яҡшы белә ине.

Неплюев үҙе бығаса ҡулланған ғәскәр көсө менән бергә хәйлә-мәкер ысулдарын да, үҙенсә политик булып ҡыланыуын да оҫта файҙаланмаҡсы. Әле Бахметьевҡа ла төп боласыларҙы тотоу, ҡыйратыу саралары менән ҡатар башҡаларына ҡарата йомшағыраҡ булырға, ышаныслы старшиналарға маҡтау һүҙҙәрен, вәғәҙәләрен йәлләмәҫкә кәңәш тылҡыны. Подполковник Исаковҡа яҙған хаты тура бойороу рәүешле ине: “Для показания тем злодеям чувства, а другим иноверцам страху, к пресечению впредь таких отважных притчин подтверждаю: в жилищах их и корень их находить и искоренить, не жалея ничего, чтоб от них ничего не осталось, а которые тому воровскому зборище другие подозрительны явятся, тех забирая под крепким караулом скованных сюда посылать, да и без выезду со всею командою до указу тому быть”.

Рәхимһеҙ ҡырырға, йорт-ерҙәре менән төбө-тамырынаса ҡоротορға, ҡалғандарының ҡурҡыштарынан ҡоттары осорлоҡ булһын. Ә шикле-

ләрен бығаулап, ҡарауыл аҫтында Ырымбурға оҙатырға! Аҡҡа ҡара менән яҙылған, әммә үҙе әле белмәгән был үлем ҡарарын халыҡ тиҙҙән аҫыу-киҫелеүе, төрмәләрҙә, ҡышҡы юлдарҙа һыуыҡтан, аслыҡтан себен урынына ҡырылышы, һөргөндәргә һөрөлөшө менән түләйәсәк ине.

Неплюев башҡорт ил-еренә килгән сағын хәтерләне. 1742 йылдың яҙы. Юлдар өҙөлгән өҙәрем миҙгел. Шуға Минзәләлә байтаҡҡа туҡталып ҡалды. Тиккә ваҡыт уҙғармаҫ өсөн, башҡорт старшиналарын – улар өсөн дә юл өҙөк тимәй – саҡыртып алды. Нисек идара итерен, тоғро хеҙмәт иткәндәргә яҡшы, илке-һалҡыларға ҡаты ҡуллы буласағын аңлатты. Икенсе йыл инде Минзәлә төрмәһендә ятҡан Ҡараһаҡалдың яҡын яу-ярандарынан атаҡлы Юлдаш мулланы, Тамъян батырҙы алтмыш старшина, тирә-яҡ халҡы күҙ алдында судһыҙ-ниһеҙ аҫтырып үлтертте. Бар Башҡортостанға ғибрәт өсөн, кем килгәнен иҫкәртер өсөн эшләтте быны. Яуыз Урусовтан да яманыраҡ наместник килә икән тигән ҡот осҡос хәбәр тиҙ таралды илгә. Теләгәнен эшләй, аҫтыракиҫтерә ине, тик артабан заманалар үҙгәрә төштө, мәғрифәтле императрица Елизавета Петровна үлем язаһын тыйыу хаҡында указ сығарҙы. Был губернаторҙың юлын бүлмәһә лә, ҡулын бәйләне, әлбиттә. Шунан ҡот осорор язаларҙың икенсе юлдарын, яңы әмәлдәрен эҙләп тапты ул: үлтергәнсе туҡматыуҙарын, аслыҡтан интектереп, һалҡында ҡатырып, сиргә һабыштырып ҡырыуҙарын. Ҡарт бүре, шымарған дипломат кеше ул саҡлы тура ярмай: бер ҡылысын, бер ҡынының күрһәтә. “Кнут и пряник” тиҙәр уны үҙ телдәрендә.

Дипломат мәктәбен үткән генерал-губернаторға, нисек кенә ҡыйырһытып алмаһын, императрица Елизавета Петровна ғәли йәнәптәре, Сенат ҡаршыһында мәғрифәтле, хуш күңелле, дворян һимммәтле оло түрә булып күренеү ҙә шарт. Шуға бында ҡылғаны үҙенсә булһа, үргә еткергәне икенсе булыр. Аҫта мәхшәр ҡайнаһа, өҫтә шымартылып ҡуйылыр. Анау 1745 йылды мишәр һәм сирмештәрҙең бер боларыуын иҫәпкә алмағанда, ҡырағай крайҙы ҡаты тотто инде тотоуын. Ҡамсыһын да, йыуасаһын да татытты. Баш бирмәҫен һөргөн ебәрҙе, йәштәрен әйләнеп ҡайтмаҫтайға һалдат олаҡтырҙы.

Оло яу күтәрелер тип һис көтмәгәйне генерал-губернатор. Нисәмә йылдар инде губернаһы тыныс кеүек ине уға. Ҡайҙан ғына килеп сыҡты һуң был бәлә – бола. Шуға башы етмәй башлыҡтың.

Подполковник Исаков, бригадир Бахметьев командаларында ебәрелгән отрядтарҙан хәбәрҙе дүрт күҙ менән көттө Неплюев. Дүрт-биш көнө айҙай тойолдо. Ниһайәт, 23 май кисенә килеп етте тәүге хәрби рапорт. Фетнәселәр ҡасҡан, тирә-йүн имен-аман, хәүеф-фәлән юҡ, тигән Бахметьев. Бер аҙ тынысланғандай итте губерна башлығы.

Шул кисте үк эштән ҡалып, секретары менән Сенатҡа яуаплы хат яҙырға ултырҙылар. “Секретно. Правительствующему Сенату действительного тайного советника Оренбургского губернатора Неплюева доношение”, — тип ҡуйҙылар башына. Бунттың ҡайҙа, нисек килеп сығыуын ҡыҫҡа ғына хәбәр иттеләр. Подполковник Исаков, бригадир Бахметьев командаһында күпме драгун, казак отрядтары ебәрелеүен

белдерҙеләр. Уларҙан килгән тәүге хәбәрҙе мәғлүм ҡылдылар. “Подполковник Исаков будучи уже в жилищах их от 23-го майю сего числа полученных чрез реченого бригадира рапортирует, что тамо за побегом тех воров ни от кого никакого своевольства и предерзостей, следственно и опасности нет; да и старшина тот, из которой волости они злодеи, сам с командою своего для поиску их к нему явился, даже и другие башкирцы идут и на почтовые станы, как на означенной разоренной, так и на другие некоторые, с которых было по той же притчине подводчики башкирцы, будучи одиноки, разбежались, паки собраны”, – тигән рапорт һүҙҙәре лә Сенатты тынысландырырҙай ине. Бунтсыларҙы тотһалар, рәхимһеҙ рәүештә аҫырға-киҫергә, йорт-ерҙәрен туҙҙырырға, шиклеләрҙе бығаулап Ырымбурға оҙатырға әҙер икәнлеген Сенатҡа еткереүҙе лә кәрәк тапты генерал-губернатор. Бунт сығартып ята, ҡаты түгел икән, тип уйламаһындар. Үҙенең көс-ҡеүәтен, ғәскәрҙең барлығын тойҙортоп, маҡтаныбыраҡ тамамланы ул хатты: “Исакову и команды прибавок как регулярных, так и нерегулярных еще послал, чрез то, тако ж и чрез движение протчих из других мест команд, с помощью божнею опасности и наипаче никакой быть не чаятельно, ибо хотя б чего нежелательно и больше того, что случилось, то у меня по врученной мне команде способов столько к пресечению иного надобно есть. Чем же вышеписанное окончится, тогда Правительствующему Сенату со обстоятельством доносить буду.

*Иван Неплюев.*
*Оренбург. Мая 25 дня 1755 г.*
*Секретарь Иван Коптяжев*”.

Барыһы ла генерал-губернатор яҙғанса булыр кеүек ине.

Подполковник Исаковтың драгундарҙан, атлы казактарҙан торған йөҙ кешелек командаһы Ырымбур—Юғары Яйыҡ крепосы трактынан, һис бер хәүеф-тотҡарлыҡҡа осрамай, поход менән 22 майҙа Сапсал почта ямына килеп тә етте. Етһәләр, көтөлмәгәнсә тирә-йүн тып-тыныс, хәүеф-хәтәрҙең әҫәре лә юҡ. Туҙҙырылған стандың ҡалдыҡ эҙҙәрен иҫәпләмәһәң, бер ни булмаған һымаҡ.

Подполковник яуын Бикбулат старшина, ҡунаҡ көткәндәй, икмәк-тоҙ менән ҡаршыланы. Ун ике кешелек һайланма һыбайлыһы менән сығып, подполковник алдында рапорт бирҙе:

— Ваше высокоблагородие господин подполковник, бунт бөттө. Бунтовщиктар ҡасты. Волоста хәүеф юҡ. Командам һеҙ бойорғанды үтәргә әҙер!

— Бунтҡа ниңә юл ҡуйҙығыҙ? Булғас, ул борҙарҙы нишләп тотмаһығыҙ? Шуға яуап бирегеҙ, старшина, – ҡаты, ҡырыҫ яңғыраны Исаковтың һораузары.

— Белмәнек, Ваше благородие. Ишеткәс, команданы аяҡҡа баҫтырғансы эҙ яҙҙырғандар.

— Ә ҡыуа төшөргә булмай инеме ни?

— Төштөк, етә алманыҡ.

Быныһы аҡланыу түгел, алдашыу икәнлеген подполковник үҙе лә һиҙгәндер, моғайын. Шулай ҙа әлегә ҡыҫымсаламай, бойороҡ һүҙенә күсте:

— Старшина, хәҙер үк беҙҙең отрядҡа үҙ һыбайлыларыңды ҡушып, бунтовщиктарҙы ҡыуа сығырға! Эҙәрлекләп табырға! Тоторға! Ә ҡалған команданы әлегә бында урынлаштырырға!

Хәл шулай ғәҙәттәгесә рапорт биреү, бойороҡтар менән еңелсәрәк тамамланды.

Бола утының ҡырға һәм төпкә китеүен тойҙо подполковник. Асыуынан волостың көлөн күккә осороп ташлауҙан саҡ-саҡ тыйылып, башта башлыҡтарын ҡулға төшөрмәк булды. Бында ла яу һалып өҫтәренә ташланманы, сабыр һәм хәйләкәр ҡыланды. Һеҙҙең, бәлки, ысынлап та ғәйеп-фәләнегеҙ юҡтыр, әммә ләкин уны губернаторҙың үҙенә аңлатырға тейешһегеҙ, шуның өсөн мин һеҙҙе Ырымбурға ебәрергә тейешлемен, тип, Михаил Исаков Бикбулат старшинаны, уның атаһы Алҡыш Һөйөндөктө, алты сотникты – Исмәғил Айыҡолдо, Өмәт Йәнәкәйҙе, Хәлил Уразгилдене, Туған Көсөктө, Дәүләтбәк Аслансыны һәм Ҡотлоюл Ҡолторсаҡты, ике десятникты – Юлдыбай Ғайса менән Мөҡсин Исмәғил улын, йәмғеһе ун йорт-ил башлыҡтарын һаҡ аҫтында Ырымбурға оҙатты. Үҙе ике йөҙ ҡоралы, атлы командаһы менән башһыҙ, ир-атһыҙ ҡалған волосҡа талпандай ҡаҙалды. Әле өҫтө-өҫтөнә яңы отрядтар киләһе, яза-эҙәрлекләүҙәр бары башланаһы ине.

## Ғалим Петр Рычков

Петр Иванович Рычков — вазифаһы менән Ырымбур губерна канцелярияһының секретары, титулы менән коллежский советник. Йәғни генерал-губернаторҙың уң ҡулы. Губерна канцелярияһы баштан-аяҡ уның ҡарамағында. Администратор, регистратор, протоколист, архивариус та ул унда. Советник, тәржемәсе вазифалары ла уға ҡарай. Иван Иванович Неплюев исеменән батшаға донесениеларҙы, Сенатҡа экстракттарҙы, рапорттарҙы Петр Иванович яҙа, ҡаҙаҡ хан-солтандары, башҡорт тархандары, старшиналары менән туранан-тура эш итә. Губернаның бар ҡағыҙҙары, хатта йәшерендәренә тиклем, уның ҡулынан үтә. Неплюев Санкт-Петербургка киткәндә, йә губерна буйлап оҙаҡ сәфәргә сыҡҡанда Рычков губернатор урынына үҙе хужа булып та ҡалғылай. Шефы ла эшен баһаламаны түгел, 1751 йылда уға коллежский советник дәрәжәһен юллап, Сенаттан указ сығарттырҙы, ҙур хеҙмәттәре өсөн ер биләмәләре бүлдертте. Был биләмәһен 1743 йылда башҡорт еренән Яйыҡ буйындағы Татищев ҡәлғәһенән 15 саҡырым төньяҡ тарафынан алғайны. Шунда Спасское тигән имениеһын нигеҙләне, үҙенә баярҙарса итеп йорт ҡорҙо, сиркәү һалдыртты. Тимәк, ер биләр, крепостной крәҫтиәндәр тотор эре помещиклыҡҡа ирешәте.

Сығышы менән аҡһөйәк түгел түгелен Петр Иванович. Вологда ҡалаһында купец ғаиләһендә тыуып үҫкән. Атаһы улын үҙ юлына күндерергә теләне, иҫәп-хисап, алыш-биреш эштәренә өйрәтте. Мәскәүгә күскәс, бухгалтерия курстарында уҡытты, аҙаҡ таможняға эшкә урынлаштырҙы. Үҙе шул эшенән ҡәнәғәт тапһа, йәки икенсе бер яйы килеп сыҡмаһа, бәлки, шулай таможенник йә купец булып ҡалыр ине ғүмере буйына.

Бирәһе килгән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына тигәндәй, тап итте бит юлында обер-секретарь Иван Кирилловты. Ул Санкт-Петербургта Ырымбур экспедицияһын әҙерләп йөрөгән саҡ ине. Саҡырҙы шул экспедицияға Петр Ивановичты бухгалтер вазифаһына.

Шул осраҡлы хәл Петр Рычковтың тормошон өр-яңы тарафҡа борҙо. Шөғөлө таможенниктан – сәйәхәтсегә, сәйәхәтсенән – юлъяҙмасыға, юлъяҙмасынан – географҡа, унан тарихсыға әйләндереп ебәрҙе. Тора-бара ғилем эйәһе булып китте.

Ырымбур губерна канцелярияһы секретары итеп тәғәйенләнгәс, көймәләргә генә ултырып ил араһына сыҡҡанда, ҡаҙна йомоштарынан тыш, крайҙы өйрәнергә киңерәк шарттар тыуа уға. Башҡорттар уны һәйбәт түрә күреп, һәр ҡайҙа ярҙам итергә әҙер торҙо. Улар, ватып-емереп булһа ла, урыҫ телендә арыу уҡ һупалайҙар. Петр Иванович үҙе лә башҡорт телен икмәк-тоҙлоҡ белә башланы. Башта үҙенә иң кәрәк һорауҙарын, хәжәт һүҙҙәрҙе ятлап алды. Түрәләренең башҡортса ла һүҙ ҡушҡанын, телдәрен белергә, һөйләшергә тырышып ятҡанын күргәс, уға мөкиббән булдылар. Ошо тәжрибәләренә таянып, Рычков аҙаҡ мең ярым һүҙ, фразаларҙан торған башҡорт һүҙлеге төҙөп ҡарай.

Йөрөр юлдарын да көймәһендә ойоп йә йоҡлап, йәиһә тирә-йүнен илтифатһыҙ ғына тамаша ҡылып бушҡа әрәм итмәне Петр Иванович. Юл буйы алдарында ҡалҡҡан теге йәки был тау, ҡурғандар хаҡында, эргәһенән уҙған йылға-күлдәр тураһында һорашып йөрөнө. Тыуған яҡтары менән ҡыҙыҡһынған баринға башҡорт ер-һыу атамаларын, кейек, ҡошҡорт исемдәрен генә  түгел, уларҙың сифаттарын, дәртләнеп китһә, тарихтарын, легендаларын ҡушып һөйләп ташлай ине. Рычков уларҙы ҡулынан төшөрмәҫ ҡуйын дәфтәренә төртә бара. Юл урап ҡайтыуға әллә күпме мәғлүмәт йыйыла, яҙма өҫтөнә яҙмалар өҫтәлә. Күсерҙәре, кәйефе килгәндә, йыш ҡына оҙон йырҙар һуҙа,  йыр тарихтарын аңлатып бирә. Йырҙарын ихлас тыңлағанда ҡыуанып, “якшы, свой башҡа!” тип маҡтап ҡуя.

Бер саҡ, Торатау буйҙарынан  үтеп барғанда, һүҙгә әүәҫ ылаусыһы был яҡтың тауҙары, Тура хан хаҡында мауыҡтырғыс әңгәмә ҡороп ебәрҙе, аҫыл таш хәситтәренә, шифалы үлән сихәттәренә инеп китте. Үҙе аяҡлы тарих, халҡының үҙ табибы ине ул, ә ундайҙарҙы байтаҡ осратты үҙ ғүмерендә Рычков. Ул шуға ныҡлы төшөндө: башҡорттар ғына үҙ иленең тарихсыһы ла, ер-һыуҙары белгесе лә, тәбиғәтен ҡәҙерләп тотоусы ла икән. Туған йорт-еренең хужаһы фәҡәт улар ғына. Килмешәктәр килер ҙә китер, китмәгәне әҙергә бәҙер йәшәр. Башҡорттар-

ҙың данлыҡлы мәғдәнселәре, оҫталары менән танышты; ағас, таш, күндән матур итеп эшләгән әйберҙәрен, йорт-ер кәрәк-яраҡтарын күреп һоҡланды. Әйбер генәме ни улар, ысын сәнғәт үрнәктәре ине.

Ырымбур экспедицияһы начальнигы Иван Кириллов крайҙың план-картаһын төҙөй башлағайны, Красильников ланд-карта төшөргәйне. Әммә улар тәүге ҡарлуғастар ғына ине әле. Картаны тултыраһы бар ине. Юл йөрөмдәге яҙа-теркәй барғандары шуларға ҡушымта булырлыҡ, үҫтереп алып китерлек ҡиммәтле мәғлүмәттәр ҙә баһа. Уларҙы топография материалы итеп ойошторорға кәрәк.

Дәртләнеп тотоноп китте бит был эшенә Рычков. Ҡаҙна эштәре араһында ваҡытын табып, йыйған яҙмаларын системаға һалып, тәфсилле аңлатмалар биреп, “Топография Оренбургской губернии” тигән ҙур хеҙмәтен яҙып бөтөрҙө. Ошо крайҙың, шул иҫәптән Башҡортостандың географик хәле, тау-урмандары, йылға-күлдәре, дала-яландары, тәбиғи байлыҡтары, кейек-ҡоштар донъяһы, аҫыл таштары, ер аҫты хазиналары тураһындағы фәнни эш килеп сыҡты. Шул ҡалын ҡулъяҙмаһын әүәл Петербургта булғанда танышыу бәхетенә ирешкән оло ғалим Михаил Васильевич Ломоносовҡа ебәрҙе. Ғәйәт ғәжәпләндереп, уға тиҙ арала Ломоносовтан хат килеп төштө. Академик уның топографияһын юғары баһалаған. Бынан да ҙур шатлыҡ булырмы икән йәш ғалим өсөн? Петр Ивановичтың түбәһе күккә тейҙе.

Был онотолмаҫ ваҡиға 1755 йылдың яҙына булды. Оҙаҡламай хеҙмәте Рәсәй Фәндәр академияһының ғилми советында тикшерелеп, хуплау тапты. Алда ул айырым китап булып баҫылып та сығасаҡ әле. Йәш ғалимдың исемен Рәсәйгә, сит илдәргә танытасаҡ. Ошо китабы уға Рәсәй Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты тигән маҡтаулы оло исем килтерәсәк.

Петр Ивановичтың Бөрйән ерендә атаҡлы ил ағаһы Алдар тархан Иҫәнгилде менән оҙаҡ әңгәмәләшкәне иҫендә. Һәр һүҙе, тапҡыр фекерҙәре менән шул көйө һаман хәтерләй уны. Башҡорт тарихы яҙмалары менән ҡыҙыҡһыныуына тархан шулай тине:

— Башҡорттоң тарихы оҙон. Беҙ белгәне генә бер мең йыл, халыҡ хәтерендә һаҡланған ҡәҙәреһе. Хәтерҙән юйылғаны бөткән. Исраф булған.

Алдар тархан бигерәк тә Яйыҡ буйына, Ырымбур тирәһенә бәйләнешле тарихтарҙы, нуғай-башҡорт мөнәсәбәттәрен, үҙе күргәндәй белеп, ентекле бәйән ҡылды.

Петр Иванович Ырымбур губернаһы тарихын яҙырға тотонғанда әле шул Алдар тархан һөйләгән, Ҡыҙрас старшина өҫтәшкән мәғлүмәттәрҙе бүтән сығанаҡтар менән сағыштырып ҡарап, системалау менән мәшғүл. Ғилми эштәре ырап ҡалғанда, уның секретарлыҡ шөғөлдәре лә тәгәрәп барған кеүек.

Июнь башында Ырымбурға тәүге тотҡондарҙы килтерҙеләр. Улар Бөрйән волосының подполковник Исаков бығаулап ебәргән һайланмыш башҡорттары, иләү ағалары икән: Бикбулат Алҡыш старшина, Алҡыш Һөйөндөк аҡһаҡал, Исмәғил Айытҡол, Өмәт Йәнәкәй, Хәлил Уразгилде, Туған Көсөк, Дәүләтбәк Аслансы, Ҡотлоюл Ҡолторсаҡ

сотниктар, Юлдыбай Ғайса, Мөксин Исмәғил десятниктар. Килтергәндең иртәгәһенә үк допрос башланды. Уны коллежский регистратор Андрей Второв алып барҙы. Ярҙамсылары янында Петр Иванович та бар ине.

Башлап Бөрйән волосы башлығы Бикбулат старшинаны килтерҙеләр. Уны танырлыҡ та түгел: битен һаҡал баҫҡан, кейеме юлда килешләй йыртылып, бысранып бөткән. Һалдырылмаған быҡауы ҡулдарын ҡыҙартып сейләндергән. Петр Иванович Бикбулат старшинаны яҡшы белә, өйөндә бер нисә тапҡыр булғаны бар. Һый-хөрмәткә йомарт, түрәләргә итәғәтле. Бойороҡтарҙы еренә еткереп үтәүсән старшина, быға шикшөбһәле яҡтары юҡ кеүек ине.

Тәүге допроста тотҡондар ҙа бер төрлөрәк һөйләне: Брагиндың этлектәрен беләләр ине, нишләһендәр – түҙҙеләр. Үлтерештә-ниҙә уларҙың ҡатнашы юҡ. Икенсе допрос та әллә ни асыҡлыҡ индермәне. Ҡаты ҡыҫып ҡарауҙар, ҡурҡытыуҙар, туҡмауҙар ҙа һөҙөмтә бирмәне: әүәл ант менән килешелгән һүҙҙәрҙе ҡабатланылар: үлтерештә ҡатнаштары юҡ, ғәйепле һанамай үҙҙәрен, батшаға һәр саҡ тоғролар.

Петр Иванович допростарҙың протоколын алып барҙы.

Алдағы допростарҙа тотҡондарҙы ҡыҙған тимерҙәр менән язалап, рәхимһеҙ туҡмап имгәтеп бөтөрҙөләр. Бикбулат старшина ҡанһырап, ғазапланып таш төрмә иҙәнендә йән бирҙе.

Йомағол менән Бәҙәл старшиналар, Исмәғил, Айытҡол сотниктар, волостың аҫыл ирҙәре, шулай уҡ туҡмап имгәтелеп, хатта ҡул-аяҡтары һындырылып, ыҙаланып үлергә дусар ителде. Әжәлдәре бөтмәгәс, төрмәлә иҫән ҡалған бүтән ил ағаларын, Рогервикка мәңгелеккә һөргөнгә хөкөм ителеп, күбеһен ҡышҡы юлда өшөп-туңып йә аслыҡтан ҡырылып үлеү көтә ине әле. Әсир итеп Ырымбурға килтерелгән ғаиләләренә лә шунса яҙмыш, хатта тағы хәтәрерәге тәғәйен ине.

Бөрйән волосында бола ҡапыл ғына ҡупты ла ғәрәсәт ҡойондай үтте лә китте кеүек ине. Иләү тын ҡалды, шау-шыу баҫылды. Ырымбурҙан килгән мылтыҡлы, туплы һалдаттарға, атлы драгундарға ҡаршылыҡ күрһәтер уҡ-һаҙаҡлы һыбайлылар ҙа, хәнйәр тотоп, уҡ төҙәп, ҡайҙалыр боҫоп ятҡан ир-ат заты ла юҡ. Донъя һип-һил. Әйтерһең, бында һис ниндәй ҡан-ҡойош та, үлтереш тә булмаған.

Батша яуы, ҡан көҫәгән йыртҡыстай, башта волостың түрәләрен, сотник, десятниктарын тотоп Ырымбур оҙатты, артынса ғаиләләрен, бүтәндәрҙе берәм-берәм сүпләй башланы. Унан унарлаған командалары, йөҙәр-йөҙәр атлы казактары менән айҙар буйы иләү өҫтөндә ашап-эсеп ятырға, талпан шикелле ҡанын һурырға ниәтләнә. Генерал-губернаторҙың мундиры үҙенә аяулы. Башҡортостанда бунт башланды, тип ҡото алынып, императрица исеменә хат, Сенатҡа рапорттар яҙып, саң ҡағыуын белде. Бәлә ҙур, тиҙерәк ярҙам ебәрегеҙ, ине һәр һүҙендә. Уға үҙ ҡул аҫтындағы мең кешелек регуляр казак полктары, ике мең кешегә етер башҡорт һәм мишәр командалары ғына, күрәһең, бик аҙ. Ул Яйыҡ буйы линияһын, диспозицияларын нығытыр өсөн йәнә өҫтәмә мең кешелек регуляр ғәскәр, штаб, обер,

унтер офицерҙар, Ставрополдән 500 кешелек ҡалмыҡ командаһын талап итте, Ҡазан гарнизоны драгун полкынан алты рота бүлеүҙе һораны.

Ҡурҡҡанға ҡуш күренә микән, нисектер, генерал-губернатор боланы яман оло бунт итеп күрһәтергә, баштан уҡ уны ҙур көс менән йәһәт баҫырға, үҙенә еңеүсе тигән дан яулап алырға ашҡына ине.

## Батырша менән осрашыу

Ҡубарылып киткән бөрйәндәр Яйыҡ буйында кордон командаһын ҡыйратып, ҡырғыҙ далаларына инеп юғалғандар, тигән ҡыуаныслы хәбәр иләүгә тиҙ етешкәйне.

Тик ятмаҡ – ҡармаҡҡа ҡапмаҡ, бөгөн атаһы – иртәгә улы. Атаһы Бикбулат старшинаны ҡулға алған көндө үк төшөндө быны Байморат. Иртәгәһен Ырымбур оҙатылған сотниктарҙың улдары менән шыпын һөйләшеп ҡасмаҡ булдылар. Кисен ашыҡ-бошоҡ ҡына йыйындылар ҙа йәйҙең ҡыҫҡа төнө таңға ауышҡанда юлға сыҡтылар. Туғыҙ ғаиләнән ун ике уҡлы-һаҙаҡлы һыбай ир-ат, ҡалғаны – бисә-сәсәләр, бала-саға. Мал-тыуарҙы алһаң, шау-шыу ҡубасаҡ. Бары ҡапылса, еңелсә генә. Имен-аман ҡасып ҡотолмаҡ көс, ҡалғанын аҙаҡ күҙ күрер – шулай уйлаштылар.

Өс ауылдан һиҙҙермәй шып-шым сығып китә алдылар инде шикелле. Һөйләшкәнсә, көньяҡлап Талҡаҫ аръяғында, Төйәләҫ буйында бергә килеп ҡушылдылар. Ҡасыр юл-ыҫыҡтары оло юлдан түгел, һил урман-тау һуҡмаҡтары аралап. Таң атҡанда Ирәндектең ҡара урмандары эсенә инеп юл яҙҙырғайнылар инде. Арттан ҡыуғын төшкәне тойолмай.

Ни ғәжәп, инде генә тын алған кеүектәр ине, һиҙмәй ҙә ҡалдылар, карателдәргә килеп ҡапландылар. Улар яр аҫтынан ҡараңғы аралаш ҡапыл килеп ҡалҡҡандай, йөҙгә-йөҙ килеп ярым ҡамап та алдылар.

Ҡаушауҙарынан башта Байморат, тағы бер нисә ир-ат айныны, ахыры. Йәнәштәрендәгеләргә ишетерлек кенә итеп бойорҙо Байморат:

– Бүҫеп инергә! Суҡмарға!

Өс-дүрт һыбайлы алға йомолдо. Ара күп булһа биш-алты сажин, суҡмарҙарҙы күтәргәнсе, карателдәр сафына барып та төртөлдөләр, тегеләр мылтыҡ саҡтырырға өлгөрмәй ҡалдылар, алыш башланып та китте. Ике яҡ бергә буталды, суҡмарҙан орош, киҫтәндән ҡыйыш ҡыҙҙы. Бер нисә кеше аһылдап эйәрҙән ауҙы, икеме-өсмө ат буталыштан айырылып, аяғы өҙәңгенән ысҡынмаған хужаһын һөйрәтеп, ситкә янтайып сапҡаны күренде.

Карателдәр йылдамыраҡ булып сыҡты. Башҡорт атлыларын арбалыларҙан айырып ҡулсаға ла алды, ҡарыулашҡанын ҡыҫмаҡлап, йәһәт ҡыйратып та ташланы. Ҡасаҡтар ни ҡөҙрәт менәндер быларҙан ысҡынған тәҡдирҙә лә барыбер Яйыҡ буйы ҡоршауына барып ҡабыр ине. Хәҙер сик буйының һәр төшө ҡарауыл аҫтында икән – Ырымбурҙан, Өфөнән, волостарҙан әллә күпме ғәскәр килеп тулған.

Талкаҫ, Һаҡмар буйҙарындағы ауылдарҙың күбеһе бушап ҡалды. Мал-тыуары менән эйәләре лә ҡырға тарала, ғаилә-ғаилә йәйләүгә күсә торҙо. Шул һылтау боҫоп-касып киткәндәре лә булды. Байтаҡтар ҡәҙимге йәйләүҙәрендә ҡалмайынса, алыҫыраҡ Урал төпкөлдәренә күсенде. Эҙләһәләр, тапмаҫлыҡ булһын. Табалар икән – боҫҡанмы, ҡасҡанмы, кем әйтә – йәйләүҙәләр. Тау-таш араһына таралған халыҡты эҙәрләп ҡара. Шуға Исаков үҙ ҡарамағындағы командаларын июнь аҙаҡтарына тамам бушап ҡалған ауылдарҙан алып, губернатор әмере буйынса кире ҡәлғәләргә ҡайтарырға йә сик буйы редуттарына ебәрергә тейеш булды. Ҙур ғына бер өлөшө Йылайыр буйында ҡалдырылды.

Аҙнаҡай старшина Алҡыш Һөйөндөктөң ейәндәренә, ҡартаталарына ышанған шикелле, ныҡ ышаныста ине, уларҙы үҙенең уң ҡулындай күреп, яу асырға бәйле хәстәрҙәре, әҙерлектәре тураһында байтаҡ серҙәрен систе. Старшинаға хәҙер ҡыпсаҡ, тамъян, үҫәргән ырыу старшиналары менән һуңғы сараларҙы асыҡлап ҡуйыу мөһим ине. Шунда Байморат менән Илембәттең ярҙамы кәрәклеген әйтте, атап йомоштар ҡушты. Береһе, сетереклерәге хаҡында ул былай тине:

– Һеҙгә ышанып тапшырыр бер йомошом шул: мин, Вознесен, Покров завуттарына ылау кәрәк, тип мөһөрлө яҙыу тотторормон ҡулығыҙға. Һеҙ шул ҡаҙна йомошо менән йөрөй булаһығыҙ. Бошман-ҡыпсаҡ старшинаһы Һатлыҡ Йәүкәйгә, һыуын-ҡыпсаҡтан Шәйле Ҡоломбәт старшинаға, сәңкем-ҡыпсаҡтың старшинаһы Теләүембәткә, үҫәргәндәрҙән Ҡыуат старшинаға завут эше һылтауы менән һәр береһенә етер, яу хаҡындағы мәктүбемде ҡулдарына бирерһегеҙ. Мәктүб ҡағыҙы кинәйәле булыр, айышын телдән төшөндөрөргә. Шартыбыҙ шул.

Башта Бөгөлсән тарафына юл тотоғоҙ. Дүрт-биш көн эсендә шунда Батырша хәҙрәт килергә тейеш. Уның менән ҡартатайығыҙ Алҡыш аҡһаҡал араҙаш ине лә бит. Белгәндәрҙән хәҙер Атанғол уҙаман ҡалды, ул барыр. Батыршаны нисек тә осратып һөйләшергә, гәйнә башҡорттарының, мишәрҙәрҙең ҡасан күтәрелерен тәғәйен белергә, килешергә кәрәк.

Үҙенән ете-һигеҙ йәштәр генә өлкән Аҙнаҡай старшинаның ҡыйыулығына, үҙҙәренә ышанып яуаплы йомош ҡушыуына Байморат бик ҡәнәғәт ине. Инде ҡасып-боҫоп ятаһы юҡ. Эшкә тотонорға, ил араһына сығырға.

Старшина бик тиҙ юл хәстәрлеген дә күрҙе, ғаиләләре хаҡында ла онотманы. Үҙән буйына бер туп мал-тыуар менән биш-алты малсыһын, ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләр кешеләрен ебәрҙе. Ә оҙон юлға сығаһыларға, яҡшы аттарын һайлап, юл нәфәкәләрен әҙерләшеп, әңгәмәләшкәндең икенсе таңында уҡ сәфәр оҙатты. Улар биш ир ине: Байморат менән Илембәт, Атанғол аҡһаҡал менән Аҡсура, Ишбай исемле ир-егеттәр. Илле өҫтөндәге Атанғол Туғандан башҡаһы егерменең уртаһына баҫҡан ҡорҙаштар, ут уйнатыр йәштәр.

Йәйҙең иң йәмле саҡтары. Көндәр ҡыҙыу. Тау юлы урман араһында талғыныраҡ булғас, барыуҙары еңел. Урман ҡош тауыштары менән тулы. Аттар көр, кәйефтәр күтәренке. Шуға тәүге көндө күпме юл

үткәнен әллә ни һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Вознесен заводын ситләтеп үтеп, Ағиҙел үҙәненә сыҡтылар. Ҡуналҡаға Ағиҙелдең һарыҡташ араһына, шарлап шаршыланып аҡҡан бер тошона, уйҡыл урынға туҡталдылар. Юл өҫтө түгел, тыныс ер.

Был тирәләрҙән үткеләгән Атанғол иртән торғас, яҡтырғас, әйтә ҡуйҙы: "Ағиҙелдең тауҙар араһынан тигеҙгә  килеп сығыр үткәүел алды был. Ҡыҫыҡ та йыраҡ булмаҫҡа тейеш". Батырша хәҙрәтте шуға әлеге уңайлы урындарынан ҡуҙғалмай, ошонда көтөргә булдылар.

Байморат менән Ишбай урман юлына төшөп алдылар. Ағиҙел менән тау араһындағы ҡыҫыҡ юл. Текә тауҙарҙан түбәнгә атлыҡҡанда йылға шаршылар, тупһалар өңөп, эре таштар  аралай шаулап аға. Ул да ҡыҫыҡтан иркенгә сығырға ашыға, күрәһең. Ҡыҫыҡ үҙе үк геүләп тора. Тау араһының үтә еле бәрә. Аҫта Иҙел, өҫтә еле шаулап-геүләп торған урын.

Аттарын үҙ яйына ҡуйып, тирә-йүн менән хозурланып туғай юлынан байтаҡ барһалар, Ағиҙел яры янында – туғарыулы арба, эргәһендә утлап йөрөгән бер атты күрҙеләр. Берәй юлаусылыр, моғайын. Аттарын тиҙләттеләр. Арбаға яҡынлаһалар, әҙ генә ҡырҙараҡ хужаһы, ғосол-тәһәрәт ҡылып, намаҙлығына сүгәләгән. Намаҙҙы боҙмаҫ өсөн, һыбайлылар шым ғына аттарынан төшөп тын көтә торҙолар. Урта йәштәрҙәге кеше, ҡалын кәүҙәле. Рәкәғәт алғанда баҫып, сүгәләп, эйелеп матур хәрәкәтләнеүҙәренән еңел һөйәкле икәне күренә.

Намаҙлығынан тороп күҙ һирпкәс, итәғәтле баш эйеп сәләм бирҙеләр:

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүмәссәләм! – Үҙе яҡын килеп, ҡуш ҡуллап күрешеп сыҡты. – Әйҙә, рәхим итегеҙ! – тип, уты һүрелеп бөтмәгән тағаны янына саҡырҙы.

— Муллалыҡ рәүешең бар, кем тип беләйек? – тине кеселек күрһәтеп Байморат.

— Өфө тарафынан килер мосафирмын. Ибн-Ғәли атлы булырмын. – Шулай яуапланы юлаусы.

— Ҡайһы ғалимдың мәҙрәсәһендә уҡымышың? — тип төпсөндө Байморат.

— Мөллә Баһадиршаһ мәҙрәсәһендә.

— Мөллә Баһадиршаһ вә һәм Мортаза хуш тoралармы? – тине атаһынан ишеткән исемдәрҙе хәтерләп.

— Бик хуш торалар, үҙегеҙ күргән рәүештә.

Йәштәр һүҙҙең тура мәғәнәһен аңламаны.

Алдарында оҙон буйлы, түңәрәк йөҙлө, мөләйем бер мосолман кешеһе. Һөйләшеүенә күрә – татар йә мишәр. Йәшкә оло ғына булһа ла, йөҙөндә һаҡал-мыйығы юҡ. Күҫә, күрәһең. Тотошо-фиғеле менән шикле әҙәмгә һис оҡшамаған.

Тын тартҡан арала мосафирҙың үҙенә лә һорашыр нәүбәт етте:

— Үҙегеҙ ҡайһы иләүҙәрһегеҙ? Ни йомоштар менән йөрөш? – тине ул.

— Бөрйәндәр булабыҙ. Ыстаршиналыҡ эше менән йөрөйбөҙ.

— Һеҙҙең бөрйән халҡын боҫоп бөткәндәр, тип ишетмәктәбеҙ, һеҙ нисек ҡалдығыҙ?

— Ворҙар боҫоп китте, бүтән халыҡ ҡалды, – тип яуапланы йәштәр.

Шулай һорауҙан һорау сығып, ҡыҙыҡһыныр әңгәмә ҡыҙып уҡ китте.

— “Ворҙар”, тип әйтәһегеҙ, ни нимәләрегеҙҙе урлап ҡастылар һуң улар?

— Урыҫтар “ворҙар”,  ти. Былай һис нәмә урламанылар. Батша әмеренән  баш тартып бола ҡубарҙылар.

— Батшаның ниндәй әмеренән баш тарттылар? – Мосафир һорау артынан һорау яуҙыра тора.

Байморат, Ибн-Ғәлиҙең шикле түгел, хатта ки үҙҙәре көткән кеше булырын самалап, барынса әйтергә уйланы.

— Брагин исемле бер залим урыҫ бар ине, – тине ул. – Шул командаһы менән йорт-ерҙәребеҙҙе таланы, үҙенә оҡшаған бар нәмәне тартып алды. Батша түрәләре, завутсылар ер-һыуҙарыбыҙға хужа булды. Һунар, биләм ерҙәребеҙ ҡыҫылды. Әлеге Брагин атлы залим бисәләрҙе, ҡыҙҙарҙы көрәләтә көсләп, зина ҡылыуҙарғаса барып етте хатта ки. Шундай яфа-мәсхәрәләүҙәргә күпме түҙмәк кәрәк? Ҡасан булһа ла бер үлем, түҙер әмәлебеҙ төкәнде тип, бер нисә сая ир-ат шул залимды юлдаштары менән үлтереп, Яйыҡ аръяғына ҡасып киттеләр. Ғаиләләре, малдары менән...

Мосафир тыныс ҡына тыңлай алманы, бүлдерҙе:

— Улар түҙмәй бола сығарған, ә ҡалғандар ҡарап торҙолармы инде, ә?!. Ниңә иләүегеҙ менән күтәрелмәнегеҙ? Үҙ баштарығыҙ йәл булдымы?  Үҙ ҡәрендәштәрегеҙгә теймәнеләрме? Шулай баш эйеп йәшәһәгеҙ, берегеҙгә лә көн булмаҫ. Әллә үҙегеҙ шул болалы ерҙәрҙән ҡасып йөрөйһөгөҙмө?

Асыуы йөҙөнә сыҡҡан мосафир һүҙенә яуаптар ҙа көтмәй ине, буғай. Быларҙы әллә йәшһенде, әллә ни?...

Баймораттың алдарында кем торғанлығына шик-шөбһәһе ҡалмағайны.

— Әй, мөллә Ибн-Ғәли, һиңә барын һөйләргә ҡыймай тора инек. Ҡыҫыҡта ине беҙҙең туҡталыш. Шунда өлкәнебеҙ.

— Кем ул?

— Атанғол Туған.

Йөҙө асылманы юлсының. Әммә ярһып алыуына үкенгәндәй һәм артыҡ һыр бирмәйенсә, “минең дә юлым шул тараф ине, ҡуҙғалайыҡ әле булмаһа”, тине ул тыныс ҡына.

Атын егеп, йыйынып һыбайлылар  артынан төшөп, туғай, үткәүел юлын яйлап үткәнсе ярайһы ваҡыт үҙҙы. Юлсылар юл буйы ләм-мим өндәшмәнеләр, мосафир арбаһында ғәмһеҙ генә ойоп бара кеүек ине.

Ҡуналҡаға етеп туҡталдылар. Аҡһаҡалдар сәләм биреп, ҡуш ҡуллап күреште:

— Әссәләмәғәләйкүм, Баһадиршаһ хәҙрәт!

— Вәғәләйкүмәссәләм! Кем тим, Атанғолмо?

— Эйе, мин, Атанғол Туғанмын. Теге саҡта...

Йөҙөнән төҫмөрләп, иҫенән яңырта ине шикелле Атанғолдо.

— Алҡыш Һөйөндөк ҡайҙа? Иҫән-һаумы? – Батыршаның тәүге киҫә һорауы шул булды.

— Алҡыш Һөйөндөк аҡһаҡалды бығаулап Ырымбур ебәрҙеләр. Шунда төрмәлә. Иҫәнме, нисек — әле мәғлүм түгел. Улы Бикбулат старшина ла тотҡон. Бына һинең менән бергә килгәне Бикбулат улы Байморат булыр.

Байморат үҙе Ибн-Ғәлиҙең ысындан да Батырша икәненә тамам төшөндө. Бына ниндәй икән ул! Баһадиршаһ атлы булһа ла, ул саҡлы баһадир ҡиәфәтле лә, Батырша ҡушаматына бәрәбәр батыр һынлы ла түгел кеүек үҙе. Ҡәҙимге әҙәми зат. Һүҙ башында уҡ ҡартатаһын һораны – дуҫ-юлдаштар, күрәһең. Ҡартатаһынан үҙ ҡолағы менән бер ишеткәйне ул: имеш, баһадир бер әүлиә ҡарт менән осраштым, үҙе олуғ дин әһеле, аҡыл эйәһе, тип. Шуға ул Батыршаны ла ғәләмәт баһадир, илаһи зат һымағыраҡ күҙ алдына килтерә ине. Биҙәп, кинәйәләп һөйләй торғайны шул ҡартатаһы.

— Алҡыш аҡһаҡал менән теге саҡ бергәләп килешкәйнек ис ҡасан яу башлар мөҙҙәттән. Шәүүәл айының дүртенсе көнөндә тип. Иртә ҡуҙғалдығыҙ. Бар мәшрүғәттәрҙе[1] боҙоп ташланығыҙ. Ни иләү менән дәррәү күтәрелмәнегеҙ, – тип асынды Батырша.

Атанғол аҡланғандай аңлатырға тырышты.

— Бөрйәндәр Брагин тигән бер яуыздан яфа-ҡаза күрҙе. Командаһы менән иләүҙе йотатты. Шул мәлғүндең яфаһынан ниндәй шикәйәт менән халыҡ Неплуй янаралға, Тәфтиләү мырҙаға барып ҡараны. Ул телдән үтенеүҙәр. Һис файҙаһы теймәне. Көт янаралдан өмөт! Үҙҙәре ана Ырымбур тирәһе халыҡтарын яфалағанды. Беҙ ҙә, һөйләшкәнсә, шул дүрт юл халыҡтары менән бергәләп хәрәкәтләнербеҙ тип тора инек. Вә ләкин көтмәк имкән ҡалманы. Тәкәтте ҡоротто яуыз. Унлап ирегет Брагинды юлдаштары илә уҡтан атып үлтергәндәр. Шунан китте стандарын ҡыйратыш.

— Ә бер ҡуҙғалғас, ниңә бар иләүегеҙ менән күтәрелмәнегеҙ?

— Уй шулай ине башта. Үлтереп ташлағайнылар тегеләрҙе, старшиналар әллә ҡурҡты, әллә бәғзеһе хыянат итте – шымып ҡалдылар. Килешелгәнсә, Талҡаҫ буйына йыйынға барманылар. Байым тархан, Мәхмүт ыстаршина яҡшатланып, батша яҡлы күренеп, Ҡыҙыл ҡәлғәһенә сапҡандар. Үҙебеҙҙең ыстаршиналар, сотниктар үлтерешкә ҡатнашһыҙ булдылар ҙа киттеләр. Йәнәһе, улар белмәгән дә күрмәгән. Һүҙҙә тормау, өркөү, икеләнеү ялҡынды баҫты ҡуйҙы. Икеләнгәндәр үҙ баштарын да һаҡлай алманы, иләүҙе лә тотош бәлә-ҡазаға һалды.

— Инде ни ҡылмаҡсыһығыҙ? Шулай боҫоп-ҡасып йәшәрмеҙ, тиһегеҙме ни?

— Боронғолар, эйгән башты ҡылыс сапмай, ти торғайнылар. Хәҙер эйелгәнде дә аяп тормай икән шул. Баштар берәм-берәм китә тора.

---

[1]Мәжрүғәт — план, ниәтләнгән уй.

Былай торһаҡ, бер-беребеҙҙең башын ашап, яйлап ҡырылып бөтөрбөҙ. Шуға бүтән иләүҙәр ҡушылырмы-юҡмы, беҙ, бөрйәндәр, түңгәүерҙәр, хәрәкәтләнергә тибеҙ. Бүтән сарабыҙ юҡ. Әлегә сәфәребеҙ бүтән иләүҙәр менән һөйләшеп ҡарамаҡта. Хәҙрәт, һине көтөүебеҙ ҙә шунан. Гәйнә башҡорттары, һеҙҙең яҡтар ни уйлай?

– Гәйнәләр әҙер. Бүтәндәр ҡубарылһа, мишәрҙәр ҙә ҡуҙғалыр тим. Арала бер нисә монафиҡ мишәр командаларынан башҡаһы, – тине Батырша. — Әле Ырымбурғаса барыш. Ҡарғалыға ла тейәм. Ахундарҙан да фатиха алыш кәрәк. Мосолмандарҙың кафырҙарға ҡаршы йыһатына әйләндереп ебәрергә кәрәк бер ҡатланғанда[2]. Көн өсөн түгел, дин өсөн орошта көс. Ҡөрьән Кәримебеҙ шулай ти. Аллаһы тәғәләнең ҡөҙрәте киң.

— Ҡырғыҙҙар менән бағланышҡа керҙегеҙме икән?

— Керҙек. Килешеп ҡайттылар.

— Йә раббым, бирһен Хоҙайыбыҙ!

Батырша менән Атанғол аҡһаҡал икәүҙән-икәү аулаҡлап, тағы байтаҡ һөйләштеләр. Үҙҙәренә генә мәғлүм йә иң ышаныслы старшиналарға еткерәһе күп нәмәләрҙе асыҡлағандарҙыр – был кәңәшләшеүҙәренә икеһе лә бик ҡәнәғәт ине.

Тарихи, ләкин тарихтың үҙенә сер булып ҡалған был осрашыу зөлкәғиҙә айы башында, Ағиҙелдең Сорғаяҙ туғайлыҡтарына килеп сығыр Ҡыҫыҡ үҙәнендә булды.

Аҙаҡ Батырша, ул-был була ҡалһа был күрешеүҙе яҙлыҡтырыу өсөн, батшаға яҙған хатында юрый мәғлүмәт кенә килтереп үтер.

Берәү антына тора алмай, хыянат ҡылып, шаһитлыҡ итеп булашһа, танмай яҙа, әммә бер кемде тоттормаҫлыҡ итеп яҙлыҡтыра.

Осрашҡандар баштарын һалыр, әммә анттарына тоғро ҡалып, сер сисмәҫ, һатылмаҫ.

Иштуғандан түбән Ағиҙел үҙәнендә шулай бер кис ҡунып, иртәгәһен Батырша Ырымбур тарафына, ә дүрт башҡорт һыбайлыһы ҡыпсаҡ, үҫәргән иләүҙәренә табан юл сығыр.

## Яңынан ҡупҡан яу

Йылайырҙа командаһы менән ҡалған бригадир Бахметьев ҡулға алынған башҡорт старшиналары менән сотниктары урынына губернатор әмере буйынса сит-ят кешеләрҙе килтереп ултыртты.

Бына һиңә мә! Халыҡ кемде, ҡайһы үҙ ҡуштандарын ҡуйырҙар икән инде, тип көтһә, әллә ҡайҙағы ят бауырҙар. Бөрйәндәр эстән борсолоп, теш ҡыҫып ҡаршыланы үҙҙәренә хаким итеп ситтән килтереп ҡуйылған мишәр старшиналарын. Әйтәһе түгел, боланың йәнә бер касафаты ине был. Бөтәү яра өҫтөнә һибелгән әсе тоҙо. Бикбулат старшина урынына уның ауылына түгел, иң алыҫ ауылға илтеп, Ғәбделваһап тигән килмешәк бер мишәрҙе старшина итеп ҡалдырып китте

---

[2]Ҡатланғанда — әҙерләнгәндә.

Бахметьев. Бер үҙе генә түгел, ярҙамсылары менән: писаре, ике яраны. Һәр береһе ғаиләле – үҙҙәре бер өйөр. Ай үттеме-юҡмы, ул үҙенең кемлеген, яман холҡон нығ белгертә башланы. Үтә тупаҫ ҡыланды. Ҡыҙып китһә, ауыҙынан сыҡҡанын эт тә ейерлек түгел. Мырҙалығы ни һан, уға әҙәме ни, әҙәбе ни. Ул – баш, башҡалар – ҡара һарыҡ. Ололарҙы һанлау, йолаларҙы йолалау, дин тотоу юҡ.

Йәйләүҙәргә "Ваһап мишәрҙәре менән Ҡусҡар Төрөмбәтте иҫһеҙ итеп туҡмап, мөгәрәпкә һалғандар икән", тигән хәбәр етте. Йылҡылар көткән дүрт-биш ир-егет атҡа атланғандар ҙа ауылға сапҡандар. Араларында яуыз старшинаға теш ҡайраған уҫал һәм ғәййәр Яубаҫар менән Яйҡар исемле уттай егеттәре бар икән. Эҫе көн тимәй, ат ярһытып, күбеккә батырып сабып килеп ингәндәр былар ярым буш ауылдарына. Туп-тура старшина өйөнә тартҡандар аттарын. Старшинаның оло эш ҡырғандай арып ҡайтып, төшкөнө ашап, хәл йыйырға ятҡан ғына сағы икән. Дөбөр-шатыр инеп, елтерәтеп торғоҙғандар быны. Йоҡоһонан айный алмай, аптырап-иҫәңгерәп тора ти башта. Ай-вайына ҡуймай, тегенең янауына ҡарамай, Ҡусҡар Төрәмбәтте япҡан мөгәрәпкә алып киткәндәр. Бикле йоҙағын астырып, Ҡусҡарҙы мөгәрәптән яҡтыға сығаралар. Ул арала Ваһап яҡлылар йыйылып китеп, янъял ҡубаралар.

Сыуалышлы хәбәрҙәр тиҙ йөрөй. Был ваҡиға көнө-тәүлеге менән бөтә иләүгә таралып өлгөрә. Бер йәйләүҙән икенсеһенә, икенсеһенән өсөнсөһөнә еткәнсе ҡабартылып, оло бола төҫөн ала, үс-асыуҙарҙан, үсәү-һарыуҙарынан йомарланған утлы йомғаҡҡа әүерелә. Уға халыҡтың үҙ ҡарғышы, асы нәфрәте өҫтәлә.

Бер киҙәнгәс, һуғырға йә боҫорға кәрәк. Әлеге Яубаҫарҙар төркөмө, туҡмалған Ҡусҡарҙы ла үҙҙәре менән алып, Ирәндек буйына, Көсөк сотник йәйләүенә саптылар. Бар хәлде һөйләп бирҙеләр. Хәл ҡырҡыу, оҫҡотолған йыртҡыстан аяу көтөп булмай. Яҡындағыраҡ азаматтарға – Атанғолға, Аҙнаҡайға, Байморатҡа, тағы бер нисәүгә кәңәшләшер өсөн елдерттеләр. Ләкин яуыз түрә көткәндән йылдамыраҡ булып сыҡты. Былар киткәстен үк писарен ат эйәрләп Яйыҡбаш ҡалғаһе ҡарай оҙатҡан, бер мишәрен Сапсал ямына ебәргән. Үҙе яҡын-ярандарын йортона йыйған. Кем өлгөр – шул ҡыра һуғасаҡ.

Һаҡҡа ҡуйылған егеттәр писарҙе Сапсалдан өҫтә, оло юлға инеп алғанында күреп ҡалалар. Артынан төшкәндәрен шәйләп, был атын ҡыҫтай-ҡыҫтай сабып ҡарай. Аяҡҡа баҫҡан сағынан бирле ат өҫтөндә үҫкән башҡорт егеттәренән еңел генә ҡасып ҡотолоп буламы ни – ике-өс ер буйы ла уҙа алмай, ҡамап эләктерәләр быны. Тентеп, бер ҡағыҙын табалар. Елтерәтеп килтерәләр Яйҡар-Яубаҫарҙар йыйылған ергә. Уҡыйҙар: "Башҡорттар бунт сығармаҡсы, йәһәтерәк отряд ебәрегеҙ", – тип Ғәбделваһаптың үҙ ҡулы менән яҙылған ҡағыҙ. Асыуҙарынан, ҡарышып, янап булашҡан писаргә арыу ғына тамыҙғылап та алалар, кикереген шиңдергәнсе.

Ялынсыға ел ҡаршы, ти, ул арала Сапсал янында хәлдәр ҡуйырып китә. Ырымбур яғынан почта ылауы күренә. Ылауҙа – ҡоралды драгун.

Мөһим депеша-хат менән, моғайын. Нишләргә? Аптырап ҡалдылар ике һаҡсы егет. Юлына арҡыры төшөрҙәр ине, һуйыл-фәләндәре лә юҡ. Әммә һағалап тороп, драгундың йәнен йәнтәслим итәләр.

Шулай ҡапыл ҡупҡан дау-талаш яуға әйләнеп, ҡан ҡойошто башлап ебәрҙе йәнә. Әҙәм ҡаны һыу түгел ҡойорға, әҙәм йәне себен йәне түгел ҡыйырға – иҫ-аңдарында булһаларсы әҙәми заттар! Һис ҡасан аҡылдарын юймаһаларсы.

Яу-дауҙар юҡтан сыҡмаҫ. Ғүмер-ғүмергә халыҡ сараһыҙҙан даулашырға, ҡан ҡойоп яулашырға мәжбүр булған. Ирке, ирлеге ир-егеттәрҙе яуға күтәргән. Ваһап ише һатлыҡ йәндәре лә күп шул илдең. Илен һатҡан ике көн дә йәшәмәҫ, тигәндәй, Ғәбделваһап килмешәк, илйорттоң йәнен алырҙай булып, бары ике ай самаһы йәшәп ҡалды. Яуызлығы менән бар халыҡты үҙенә ҡаршы аяҡландырҙы. Өс ҡуштаны менән ҡасып китергә сыҡҡан ерҙәренән Ғәбделваһапты һағалап, эләктереп алдылар. Сапсал станын бер йәй эсендә икенсе тапҡыр ҡыйратып, яндырып, яу сыҡҡандар Япан ауылына килделәр. Яуыз старшинаны өс яраны менән шунда, торған урындарында хөкөм итергә булдылар. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙаһы түгел. Йорт-ергә ҡаза килтергәндәр ҡаҙалып үлергә тейеш – халыҡ һүҙе шундай. Хөкөмдәре үҙ ҡулдарында. Йыйын Ваһапты өс яраны менән аҫып үлтерергә хөкөм сығарҙы.

Залим Ваһаптар өйөрөнә тейешле язаһын биргәс, яуға күтәрелгәндәр тағы ғибрәт өсөн үҙҙәренең шунса яуыз, шунса һатлыҡ йән түрәһен – Ҡазан юлы Ҡаршы иләүе башҡорт старшинаһы Шәрип Мерәкте тотоп аҫмаҡсы булғайнылар. Шәрип Мерәк – күптәнге ҡарт бүре. 1742 йылда башҡорт депутаттары менән Петербургка барып, Елизавета Петровнаны батша итеп тәхеткә ултыртышыу байрамында ҡатнашҡан, затлы бүләктәр алып ҡайтҡан арҙаҡлы старшина ул. Неплюев Ырымбур губернаторы булып килеп ултырғас, яңы оло түрәгә яҡшатланып, офицер чины, затлы бүләктәр алыр өсөн, вице-губернатор Аксаков менән икеһенең араһына инеп, низағлаштырып, яңыһына ярҙамлашып йөрөй. Йәғни яңыһы өсөн иҫке дуҫы вице-губернаторҙы һата. Яңы губернаторға таянып, Шәрип яман баш-баштаҡланып, үҙ иләүе халҡын яфалай. Шул ғына етмәгән, Урал аръяғына килеп, бөрйәндәр араһында шымсылыҡ ҡылып йөрөй башлай. Бер-ике старшинаны губернатор ҡулына тотоп бирешә. Үҙе түгел, ҡулы, ҡуштандары үтәй быны.

Ана шул һатлыҡ йәнде лә тотоп, ҡаты язаһын бирмәкселәр ине лә, һиҙгер ҡарт бүре, ҡойроҡто бот араһына ҡыҫып, Кана-Никол заводына һыҙып өлгөрҙө. Заводты ҡамап, ут төртөп, йыртҡысты томалағандай тотмаҡ кәрәк булыр. Әлегә Сапсал, Бәрәкә стандары туҙҙырылып, төтәп яна ҡалды.

Бөрйән иләүендә икенсе тапҡыр әлеге яу хәлдәре һижрәттән һуң бер мең йөҙ ҙә егерме һигеҙ сәлә тарихында, суҫҡа йылында, зөлҡәғиҙә айының ун беренсе көнөндә башланып китте. Йәғни, милади хисабынса, 1755 йылдың 8 август көнө ине был.

Тарих ҡабатлана кеүек. Май айында Әмин, Сураш батырҙар Брагин бригадаһын ҡыйратып, Сапсал станын яндырып, ғаиләләре менән Яйыҡ аръяғына ҡасҡайнылар. Был юлы Яубаҫар, Яйҡара батырҙар килмешәк мишәр старшинаһын ярандары менән язалап, шул уҡ Сапсал станына ут төртөп, Ырымбур—Юғары Яйыҡ трактын туҙҙырып, яу ялҡынын дөрләттеләр. Ләүкеп ҡабынып китерме, әллә тәүгеһе шикелле ҡапыл һүнеп ҡуйырмы? Осраҡлы һәм әҙерлекһеҙ булып ҡуймағайы. Әммә, нисек кенә тимә, оло яуға саҡырыу ине ул. Йорт-ерҙе тарҡатыр һатлыҡ йәндәргә хәтәр иҫкәртеү ҙә ине.

Теге ваҡытты Атанғолдар ҡыпсаҡтар, үҫәргәндәр араһында, ил эсендә айға яҡын ғүмер йөрөп ҡайттылар. Күрәһен күрҙеләр, һөйләшәһен һөйләштеләр. Юлдары уңды, һүҙҙәре беректе, буғай. Үҙҙәре ныҡ йонсоһалар ҙа, ҡәнәғәт инеләр.

Ҡайтып йәйләүҙәренә таралғас, бер аҙ хәл алғас, һәр кем үҙ йорт-ер хәстәре менән булды, бесән эштәрен бөтөрөштө, ашамлыҡ игендәрен йыйышты, сабағыштан үткәреште. Уларын әүендә, кәбәндә тотоу ярамай ине быйыл. Иң мөһиме — ҡорал-яраҡ яраҡлау: уҡ-һаҙағын йүнәтергә, һөңгөләрен осларға, һынғандарын һапларға, ҡылыстарын ҡайрарға, һуйыл, киҫтәндәрен барларға, ҡалҡан, көйәктәрен табырға, йәҙрәһен әҙерләү, саҡса, ҡотоҡсаларын рәтләү бер бурыс. Батыр күпме булмаһын, яуҙа таһыллы, ҡоралы еңә. Яу һөнәренә өйрәнмәк-өйрәтмәк тә оло хәстәр. Шулар менән шөғөлләнде сотниктар, яу башлыҡтары, ил ағалары. Төпкөлөрәк урындарҙа тимерлектәр ҡоролдо, башаҡтар сүкелде, хәнйәрҙәр яһалды, ҡорал таярланды. Завод эшенә, ылауына йөрөгәндәр тимерен-томорон, тегеһен-быныһын табып килтергеләне. Яу һынлы яуға әҙерләнгәс, әллә күпме ер-һыуҙар кисеү, киҫкен хәл тыуа ҡалһа, тирмә-ҡорамалдарың, ғаиләң-ниең менән ҡубарылып боҫоп, алыҫтарға ҡасыу алға баҫһа, аттарыңдың дағалы, арба-саналарың ныҡлы, кейем-һалымдарың, иң кәрәк-яраҡтарың төйнәк булыуы ла хәжәт ине. Тулай аҙыҡ-түлекһеҙ, мал-маһыяһыҙ ҙа яу яу түгел.

Ҡыҫҡаһы, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары, урман-тауҙар ҡуйынына һыйынып, сараһыҙҙан яуға әҙерләнә ине. Йәйләүҙәрҙә йәйрәп йәшәү, йәй хозурлыҡтарына кинәнес теймәне быйыл. Ер-һыуың таланғанда, күпме ыҙа-яфалар күргәндә, ауыҙыңдан ҡан түкөргәндә йәм-күңел уйымы ни. Ил-йорт, көн ҡайғыһы көслөрәк.

Көсөкбай батырҙың улы тыуған икән, шуны һылтау итеп, бер төркөм ил ағалары улын ҡотлау ҡунағына йыйылды. Батырҙың Ирәндек буйындағы ауҡан йәйләү еренә – ҡәҙимге ағытауына (быуындан быуынға килгән йәйләүлек). Ҡыҙыл буйы, Һаҡмар башы төбәгенең күҙгә күренгән ираттары. Араларында Атанғол аҡһаҡал, Түңгәүер старшинаһы Аҙнаҡай, Ҡарағай-ҡыпсаҡ старшинаһы Ырыҫҡол, Икенсе Бөрйән старшинаһы Баймаҡ, Яубаҫар, Күсембай батырҙар бар. Байморат менән Иләмбәт тә ошо ҡорҙа.

Йолаһын йолалап, бала ҡотлап, баталар әйтеп, гөбөләре тулы ҡымыҙы, ашлауҙары өймәләм ите, аш-һыуы менән һыйланып алғас, ирҙәр аҡ тирмәлә үҙҙәре генә аулаҡлабыраҡ төп эштәренә, яуға күтәрелеү мәсьәләһенә күсте.

Атанғол аҡһаҡал “Әҙерлек нисек?” тигәнгә табындағылар ыңғай яуапланылар, барыһы ла бер ауыҙҙан тиерлек “Һөйләшкәнсә, иртәгәнән сығырға әҙербеҙ”, тинеләр. “Килешкән мөҙҙәтебеҙ килеп етте, һәммәбеҙ бөгөндән әҙер булырға тейеш, – шулай дауам итте һүҙен аҡһаҡал. – Йөрөп һөйләшеп ҡайтҡанса, белешеүебеҙсә, ҡыпсаҡтар, үҫәргәндәр әҙер. Ант һүҙҙәрен йыҡмаҫтар. Улар ылаң көтә. Һуҙыу, һуңлау һис ярамай. Башлау – бөрйәндәргә, ҡушлау – бөтәбеҙгә”.

Ҡараһаҡал яуҙарын кискән, яу-хәрби тәртиптәрен яҡшы белгән Атанғол Туған, старшиналар тарафынан яу башы итеп тәғәйенләп ҡуйылыуынса, кәңәшмәне лә үҙ ҡулына алып, һуҙмай-нитмәй, хәрбиҙәрсә ҡыҫҡа тотто. Һүҙҙәре лә бойороҡ рәүешендә ине:

– Яуҙы зөлкәғиҙәнең ун икеһендә, йәғни биш көндән, Яубаҫар батырҙар төркөмө башлай. Кемдәр ҡатнаша икәнен һөйләшкәнбеҙ. Ваһап мишәрҙе ярандары менән тотоп үлтереүҙән. Шунан Сапсал, Урал стандарын яндырырға. Шул яу ылаңы булыр. Байморат башлығында бөрйәндәр, түңгәүерҙәр, ҡарағай-ҡыпсаҡтар Вәзнисин заводын ҡамай, үрт һала. Баймаҡ старшина отряды менән Преображен заводын урата. Уны нисек юҡ итеү яғын ҡарай. Көсөкбай батыр отряды Покров заводына сыға. Башта беҙгә шулай уратып заводтарҙың көлөн күккә осорорға кәрәк. Арабыҙҙа дошман нығытмаһы, һалдаттары ҡалырға тейеш түгел.

Шул көндө яуға әҙерлек, заводтарға нисек һөжүм ойоштороу, сапҡындар тәғәйенләү эштәре менән төнгә тиклем ултырҙылар.

Вознесенский баҡыр заводын бөрйәндәрҙең иң шәп солоҡ биләм ерҙәре уртаһына һала башлағайнылар. Ағиҙелгә бер саҡырымдай ғына ара Ырғыҙлы һыуы буйына, эре ылыҫ урманлы тауҙар ҡуйынына. Рәсәйҙән меңгә яҡын урыҫ крәҫтиәндәрен килтереп тултырҙылар ҙа урманын киҫергә, Ырғыҙлыны быуырға, өйҙәр күтәрергә тотондолар. Йыл-йыл ярым ғүмер ҙә үтмәне, элек айыуҙар ғына йөрөр ерҙәрҙә ете баҡыр иретер мейесе, өс гормахеры менән заводы, уның тирәләй йөҙ илле өйлө ҙур ауылы ҡалҡып та сыҡты. Башына ялтыр тәреһе ҡуйылған бейек манаралы ағас сиркәүе лә ҡайҡайтып ултыртып ҡуйылды.

Бөрйәндәр башта был төҙөлөштө ҡыҙыҡһынып һәм ғәжәпһенеп күҙәтте. Заводын, йорт-ҡаралтыларын һалырға шул урынындағы урманы, ағас-ташы етте. Заводтың ике-өс мейесе эшләй генә башлағайны, мәңге туймаҫ ғуж төҫлө, ҡара урмандарҙы төптәре һерәйеп ҡалған яланға әйләндереп йота ғына, ағасын йығып ҡына өлгөр. Башҡорттар үҙҙәре сәй-шәкәренә, аҡса-фәләненә алданып, урман киҫергә, ағас-таш ташырға ялланды, күмергә иң шәп биләмдәрҙе үртәй башланы, урман аралап, ҡайын йығып туйыҙ һыҙырҙы. Шулай бер-ике йыл эсендә Ағиҙел, Ырғыҙлы буйы урмандары бөтөп, төпһәле яландар пәйҙә булды. Шау-шыуға айыуҙар, бар кейектәр төпкөлдәргә ҡасты. Улай ғынамы, гөрһөлдәүҙәрҙән тирә-яҡ урмандарын ташлап китте, кейек-ҡош бөттө.

Ниһайәт, үҙҙәре күреп төшөндөләр: былай барһа, ун-ун биш йыл эсендә Урал тауҙары шәрәләнә башлаясаҡ, солоҡсолоҡ кәсептәре ҡыҫыласаҡ, һунар биләмәләренең ҡото китәсәк. Өҫтәүенә, завод кеше-

ләре йылға-күлдәрендә шартлатып балығын ҡыйрата, урмандарында мылтыҡ менән кейектәрен ҡыра. Ағиҙел үрендә тағы Әүжән-Петровский, бөрйән ерҙәрендә йәнә Петровский, Преображенский заводтары һалынып ята. Ул саҡ ни ҡалыр икән был ер-һыуҙарынан. Ҡаҙнаһы бер хәл ине, әллә ниндәй бай купецтары, эре промышленниктары заводтарын һатып алып, яңыларын һалып, тағы һарауһыҙыраҡ ҡыланырға тотондо. Күбеһенә хәҙер батшаның иң яҡын һанаттары, граф-фәләндәре хужа тиҙәр. Улары үҙҙәре күренгәне лә юҡ, барыһы управляющийҙары ҡулында. Шулар – баш, шулар – түш.

Вознесенский заводының төп хужаһы Сиверс тигән бер ҙур вельможа. Ул – обер-гофмаршал, действительный камергер һәм төрлө ордендар кавалеры, барон, бер һүҙ менән әйткәндә, батшаның фавориты. Сығышы менән немецтар тоҡомонан, атаҡлы Гольштейндар нәҫеләнән. Петр Беренсе заманында Рәсәйгә килгәндә император ҡыҙы Елизаветаны ҡарашыр лакей ғына булған. Анна Иоанновна батшалыҡ иткәндә алыҫҡа һөргөнгә ебәрелгән тиҙәр. Елизавета Петровна тәхеткә ултырғас, һөргөндән ҡотолғандан һуң батша һарайында ҡәһүә ҡайнатыусы булып эшләгән. Аҙаҡ, нисектер, батшаға ярап, гофмаршал дәрәжәләрен, барон исемдәрен эләктергән. Байығып, батша тирәһендәге ҙур түрәләр шикелле, Урал заводтарынан ошо Вознесенский баҡыр заводын һатып алған. Бөрйәндәр үҙҙәре әҙ-мәҙ ишетеп кенә белгән ошо Карл Сиверстың үҙ ерҙәрендә ултырған Вознесенский заводын ҡыйратыуҙан башларға булдылар яуҙы.

Туғыҙынсы августың таңында Байморатттың ҡырҡ һыбайлыһы Ырғыҙлы тауының үрендә ине инде. Аҫта, таң яҡтыһында, завод быуаһы шыйыҡ ҡына томанға сорналып, завод мейестәре тын ғына күренеп ята. Халыҡ әле уянмаған. Нығытмалар артындағы һаҡсылары әллә уяу, әллә юҡ – белерлек түгел.

Ҡырҡ уҡ-һаҙаҡлы һыбайлы менән нығытмалы заводҡа тура ябырылыуҙың мәғәнәһе юҡ. Нығытма артына боҫҡан мылтыҡлы һаҡсыларҙан еңел генә ҡырылып бөтөргә мөмкин. Әлегә маҡсат – заводтың һаҡланыр көсөн ҡапшап ҡарамаҡ, нығытмаларына ут һалмаҡ. Ут һалмаға, яҡын аранан уҡтан алмаға ашығырға кәрәк барыһы аяҡҡа баҫмаҫ борон.

Байморат ике яҡтағы ике бейек бүрәнәле ҡапҡаларға ҡаршы унар һыбайлыһын ҡуйып, бишәр кешеһен дүрт урында нығытмаға ут төртөргә ебәрҙе. Яҡтырып килә. Ашығырға кәрәк. Ут һалыусыларҙы күреп ҡалмаһындар өсөн, ҡапҡалар янында шау ҡуптарып, бар иғтибарҙы шунда тартмаҡ бурыс. Атлылар, уҡ алыр ара ҡалдырып, ҡапҡаға яҡынланы. Икәүһе, ҡулдарына ыҫмалалы сүбәк уралған киҫәү тотоп, боҫа-боҫа бейек ҡапҡаға китте. Береһен ҡапҡа аҫтына һалып ут төртөү, икенсеһен утлы көйө һаҡлау манараһына ырғытыу менән һаҡсылар йоҡоларынан уяныш, мылтыҡтан ата башланы, шау-шыу ҡуҙғалды. Ҡапҡа аҫтынан сатырлап ут сыҡҡаны, төтәгәне күренде. Ҡалҡынған һаҡсыларҙы киҫеп, һыбайлылар уҡ яуҙырҙы. Һүгенеү, ыңғыраш тауыштары ишетелде. Заводтыҡылар аяҡҡа баҫты. Күренгәндәргә эскә лә уҡтар осто. Аҡырыш,

сыуалыш китте. Ул арала шом, буталыш тыуҙырып, дүрт тарафтан төтөн бағаналары күтәрелде.

Ут төртөүселәр аттары менән әйләнеп килеүгә, Байморат өсәүһенә, заводҡа әлләһаҡлыҡ өсөн ҡалдырылған урмандары ҡырына, эскә өйөлгән ҡышлыҡ әрҙәнә өйөмдәренә ут һалырға, туйыҙ эҫкертен яндырырға бойорҙо ла, биш һыбайлыһын Ырғыҙлы буйына утлап йөрөгән йылҡы өйөрөн өйөрөп килгән юлдарына ҡыуырға ҡушты. Һөйләшкәнсә, ҡайтыр юлда урман киҫеүселәр аласығы янында осрашалар. Артта завод ялҡынланып, төтәп янып ҡалды.

Шау-шыуын, янғынын да һалдылар, кем белә, һаҡсыларынан үлеүселәр барҙыр, яраланғандары байтаҡтыр, әммә ләкин уҡ-һаҙаҡлы әҙ генә туплан менән нығытмалы заводты ҡыйратып булмай шул. Мылтығы, тубы кәрәк.

Ике көндән Байморат отряды шул уҡ яугирҙары менән Яубаҫар батырҙың илле һыбайлыһына ҡушылып, Вознесенский заводына ике яҡлап икенсе тапҡыр сапҡын яһар. Был юлы янғын емергән урындарҙан үтеп эскә лә инер, унда заводҡа, контор йорттарына ут һалыр. Управляющийы Иван Гордиевский ашығыс ярҙам һорап, Өфө тракты буйынса Урал заводтарына килеүсе премьер-майор Бергентрейх командаһындағы ике йөҙ казакты үҙҙәренә саҡыртып сапҡы ебәрер. Әммә завод тиҙ генә аяҡҡа баҫа алмаҫтай емерелеп, төтәп ятып ҡалыр. Был яу ялҡынының беренсе саткыһы ғына әле.

Байморат һыбайлылары Вознесенский заводына тәүге һөжүм ҡылған көндө көньяҡлап Ырымбур – Яйыҡбаш тракты өҫтөндә ултырған Преображенский заводына Баймаҡ старшина менән Ырыҫҡол Ҡоломбәт башлығындағы ҙур төркөм ҡара яу булып ябырылды. Һөжүм шул тиклем ҡаты һәм тиҙ булды ки, һаҡсы һалдаттар атлылар сабыуылын мылтыҡтан атып ҡаршыларға ла өлгөрмәнеләр, һыбайлылар ҡапҡаны емереп, тегеләрҙе ҡылыстан ҡыйып, тапап эскә үтеп тә киттеләр. Ике яҡтан да ҡорбандар булды. Яусылар ҡайтыр юлда завод өсөн әҙерләнгән йөҙәрләгән йөк әрҙәнәләрҙе яндырып, күмер өйөмдәренә ут һалып, оҙаҡламайынса урманға инеп юғалдылар. Завод янында тағы унлап бесән эҫкерттәре янып ҡалды. Төрлө ерҙән күтәрелгән ялҡын телдәренә, төтөн болотона ҡарағанда, Преображенский заводы тотош ҡапланып яна кеүек ине.

Преображенский заводының хужалары Иван Твердышев менән Иван Мясниковҡа управляющийҙары яҙған хаты, шулай уҡ Ырымбур тау идараһы исеменән Петербургка Берг-коллегияға ебәрелгән рапорт буйынса, был һөжүм ваҡытында батша һалдаттарынан һәм завод кешеләренән 48 кешенең үлгәнлеге, 22 кешенең яраланғанлығы асыҡ мәғлүм булыр. Быныһы ҡанлы яу утының бер көнгө икенсе саҡҡыһы. Өсөнсөһө өсөнсө көндө Ташлы рудникгын тамам ҡыйратып, урынында көл-күмер генә ятҡырып ҡалдырыр. Яу ут-үрт һалыуҙар ғына түгел шул. Иң хәтәре – ҡан ҡойош һәм йән ҡыйыш. Әҙәмдәр йән аямай ут эсенә инә, ҡылыстан киҫелеп йә һөңгөгә сәнселеп үлә, пуля йыға. Кем ажарлыраҡ, кем көслөрәк — шул еңеп сыға.

15 августа Эйек-Покровский заводындағы һуғыш шундай ажарлыларҙан булды, ахырыһы. Оло Эйек башындағы Покровский баҡыр заводы 1753 йылды ғына төҙөлә башлағайны. Ерен һыуын-ҡыпсаҡ менән үҫәргән башҡорттарынан батша вельможаларының иң күренеклеһе, генерал-фельдмаршал, лейб-гвардия полковнигы, әллә нисәмә ордендар кавалеры граф Александр Иванович Шувалов һатып алғайны. Бай граф үҙе тиҙләттерҙеме, әллә Михайло Петров тигән приказчигы өлгөр булып сыҡтымы, ике йыл эсендә килтерелгән өс йөҙләп крәҫтиәндәр көсө менән ете баҡыр ҡойоу мейесе һәм өс гормахер менән завод һалып та ҡуйылды, эргәһендә ҙур ауылы барлыҡҡа килде. Аҡсаһын, аҙығын биргәс, башҡорттар ҙа төҙөштө, ярҙамлашты инде.

Берг-коллегияның указы менән тип, йәнә завод әйләнәһенә иллешәр саҡырым ерҙе лә бүлеп алдылар. Эйек үрҙәренең иң шәп урманлы тауҙары, йәйләр үҙәндәре китте ҡуйҙы. Был заводтың урмандарын ҡырып, һыуҙарын ҡоротоп, үҙҙәрен ылау ҡыуҙырып йотасағын һыуын-ҡыпсаҡтар һиҙеп алды ла бит – һуң ине. Бәлки, уны яндырып, ҡыйратып ҡотолоп булыр – шундай уйға ла килгәйне улар.

Үсе барҙың көсө табылыр, тигәндәй, Эйек үрендә һыуын-ҡыпсаҡтар менән үҫәргәндәр йөҙ иллеләп ҡоралллы атлыларын туплап өлгөрҙө. Покровский заводын ҡыйратыуҙы Аҙнаҡай старшина менән Көсөкбай батырға тапшырҙылар. Көсөкбай батырҙың күптән ҡулы ҡысый ине. Бер саҡ завод приказчигы Михайлоны, яман яһил әҙәмде, юлда тотоп ҡотон да алып ҡарағайны, ләкин быны менән генә үсе ҡанманы. Ә тегеһе оторо ҡоторҙо. Приказчикта ғынамы ни бар бәлә?

Ҡоро батырлыҡ менән дә әллә ни алдырып булмай, ҡорал кәрәк. Әммә башҡорттарҙың төп ҡоралы уҡ та һаҙаҡ, киҫтән дә ҡылыс ҡына ине шул. Хәҙер былдай ҡорал ғына етмәй, утлы ҡорал — мылтығы, тубы хәжәт. Баштан-аяҡ ҡоралллы, туплы, мылтыҡлы батша ғәскәрен, завод, ҡәлғәләрен уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс-киҫтән менән еңеп булмай.

Ҡайыны бар – ҡайғырмаҫ, тимере бар – тилмермәҫ, ти башҡорттар. Ҡайындарынан уҡ-йәйәләрен, һөңгө һаптарын яһайҙар, тимерҙәренән һөңгөһөн, ҡылысын, ҡалҡанын сүкейҙәр. Үҙ заводтары булмағас, тубын, мылтыҡтарын яһай алмайҙар шул. Уға үҙ оҫталары ла юҡ. Дарыһын үҙҙәре яһайҙар ҙа һуң... Шул саҡма мылтыҡты, мушкетын яуҙа ҡулға төшөрөргә тура килә. Ә яуҙар өҙлөкһөҙ булып, гел еңеү менән бөтөп тормай. Туплыйәҙрәле булыу бик һирәк тейер бәхет. Иректәре булһа, әҙерәк юл ҡуйһалар, аҡ балсыҡлы, баҡыр, тимер мәғдәнле, урман-һыулы хазиналай ерҙәрендә үҙҙәре завод ҡора алмаҫ та, ҡоралдарын яһамаҫтар инеме ни? Заводын түгел, хатта тимерлеген дә ҡорҙормайҙар ҙа баһа башҡортҡа. Рәсәй һынлы Рәсәй, император атлы батшалары ҡурҡа. Ҡурҡмай нишләһен, уҡ-һаҙаҡтары, киҫтәндәре менән генә лә ҡоттарын алып торғанда. Өҙгөләнеп шулай уйланғандары бар Көсөкбай батырҙың.

Һыбайлылар үҙҙәренә яҡшы таныш һил урман юлынан теҙелешеп заводҡа ҡарай төштөләр. Ара егерме саҡырымдар, еңел һыбайлылар өсөн бер тынлыҡ юл. Завод халҡы бесән, әрҙәнә әҙерләү эшенән әйләнеп

ҡайтҡансы барып өлгөрөргә кәрәк. Көндөҙ һаҡсыларҙың да уяуһыҙыраҡ булыуы ихтимал.

Эйек буйындағы завод мөрйәләре, сиркәү манараһы күренеү менән туплан өскә бүленеп, өс тарафтан яҡынлашып, заводҡа бер ваҡытта бер юлы сабыуыл күтәрелергә булды. Ағас, таштар аралап, күҙгә күренмәй һаҡ хәрәкәтләнделәр. Көсөкбай батыр үҙе уртала ҡалған төп төркөмдән ике араға йөрөксөләр ҡуйғайны. Улар ҡанаттағы ике төркөмдөң дә килеп туҡталыуын хәбәр итте. Шунан бер юлы һибелеп, заводҡа ҡарай тауыш-тынһыҙ асыҡ яланға сыҡтылар. Завод араһы күп булһа ике-өс юл буйы самаһылыр. Уның нығытма-фәләне юҡ. Дүрт тарафында бурамалап һалынған әллә ни бейек түгел дүрт һаҡсы манара, араларында ауыш-тыуыш бурама кәртә – бар нығытма ишараттары шул.

Бер сәғәт үттеме-юҡмы, завод баҫып та алынды, ун ҡоралллы һаҡсыһы юҡ ителде, заводсыларҙың ҡарыулашҡандары уҡтан йә киҫтәндән үтте, заводына ут төртөлдө.

Шулай генерал-фельдмаршал Александр Шуваловтың Эйек-Покровский баҡыр заводын ҡыйратып, ут һалып, Көсөкбай батыр тупланы атлы-арбалылар менән еңеүсе сифатында ҡайтыр юлдарына боролдо.

Бынан өс көн ҡала Ағиҙел баштарында Александр Шуваловтың бер туған ағаһы, шулай уҡ генерал-фельдмаршал чинлы Петр Иванович Шуваловтың Әүжән-Петровский заводы баш күтәргән башҡорттар тарафынан ҡамап алынды. Август урталарында инде бөтә көньяҡ Башҡортостан ихтилалға күтәрелгәйне. Урал тауы эстәрендә, Ағиҙел, Һаҡмар, Эйек үрҙәрендә, Яйыҡ буйҙарына табан төрлө ерҙәрҙә ҡанлы алыштар бара, заводтар яна, ҡәлғәләр, стандар туҙҙырыла ине.

## Граф Шуваловтар

Санкт-Петербургтың, ғәҙәттәгесә, шау-гөр эсендә йәшәп ятҡан көнө. Императрица Елизавета Петровнаһы, Сенаты, Берг-коллегиялары хөкүмәт хәстәре, дәүләт интригалары, һанат-чиновниктары яҙыу-һыҙыуҙары, завод, фабрика эшселәре үҙ һөнәрҙәре, сауҙагәрҙәре, һатыусылары алыш-бирештәре, уҡыусы-курсанттары уҡыуҙары, һәр кем үҙ эше менән мәшғүл. Падишаһынан, яҡын яран-вельможаларынан, хөкүмәт әһелдәренән башҡа, әллә ҡайҙағы ниндәйҙер башҡорттарҙың баш күтәргән тигәнен ишеткән-белгәндәре лә юҡтыр ғәуам-хәуастың. Рәсәй икһеҙ-сикһеҙ киң бит ул. Ниндәй генә ҡәүем, ниндәй генә ғәүем юҡ хәҙер унда.

Елизавета Петровна тәхеткә ултырғанда падишаһ ҡәһәренә эләгеп, Иван Иванович Неплюев Малорәсәйҙә наместник дәрәжәһенән төшөрөлөп, Ырымбур крайына ебәрелгәс, элекке абруйын ҡайтарыр, Петр Беренсе батша ҡыҙының мәрхәмәтен яулар өсөн ғәли йәнәптәр, хөкүмәт вельможалары күрерҙәй эштәр атҡарырға тырышты. Бар көсөн, һәләтен һалып, Рәсәй империяһының көнсығыш сиктәрен нығытыуға сат йәбеште. Хакимиәтле Сенатҡа һәм Сит ил эштәре дәүләт коллегияһына Ҡаҙағстанға, Урта Азияға нисек үтеп инеү, Башҡортостанды тулыһынса

колонизациялау хаҡында проектын төҙөп бирҙе. Сенат хуп күрҙе. Оҙаҡламай, 1744 йылда Ырымбур крайына Өфө менән Исәт провинцияларын, Ҡазан крайының көнсығыш өлөшөн индереп, Яйыҡ казактары менән Ставрополь ҡалмаҡтары ерҙәрен дә ҡушып, Волга буйҙарынан, Каспий диңгеҙе ярҙарынан алып Себергәсә, ҡаҙаҡ далаһы эстәренәсә йәйелгән ифрат киң, оло бер дәүләтлек Ырымбур губернаһы төҙөлөп, Неплюев шуның генерал-губернаторы итеп тәғәйенләнде. Шунан Каспий ярындағы Гурьевтан алып Яйыҡ йылғаһы буйлап Ырымбурғаса өҫтәмә крепостар, Ырымбурҙан – Орскийға, Орскийҙан – Яйыҡбашҡа, Яйыҡбаштан Себергәсә меңәр саҡырымдарға һуҙылып, сик буйы һыҙығында яңы крепостар, редуттар төҙөү эштәре башланды. Ул Һаҡмар, Красногорский, Орский, Себер дистанцияларына бүленде. Һалынып ятҡан крепость-ҡәлғә һәм редуттарына үҙ гарнизондарын, сик буйы ғәскәрен булдырыу хәстәрлеген күрҙе. Сенатҡа ул йәнә “Запас план” тигән проектын юлланы. Быныһы инде сик буйында крепостарға ниндәй ғәскәр тотоу, Ҡаҙағстанды нисек буйһондороу, Башҡортостанды ҡорал көсө менән ҡалай ауыҙлыҡлау менән туранан-тура бәйле ине. Был проект буйынса ғәскәр төп Ырымбур корпусынан ғибәрәт булып, уға өс регуляр полкы (бер атлы, ике йәйәүле полктар), бер мең Дон казактарынан, биш йөҙ Ставрополь керәшен ҡалмаҡтарҙан, лашман эшенә тәғәйен өс-дүрт мең Ҡазан татарҙарынан, ике мең ярым башҡорт һыбайлыларынан торор регуляр булмаған полк, роталары ла инергә тейеш ине. Неплюев һуңынаныраҡ Яйыҡ казактарынан Яйыҡ казак ғәскәре ойоштороуға ла кереште. Һәр хәлдә, генерал-губернаторҙың ниәте губернаны, шуға ҡараған Башҡортостан ерҙәрен хәрби колониаль-административ режимға буйһондормаҡта ине. Шул ниәтенә, мәкерле маҡсаттарына күп йәһәттән ирешә лә алды ул ҡаты ҡуллылығы менән. Шуның уңайлыҡтары, күпмелер етмәгән йомшаҡ яҡтары 1755 йылғы башҡорт ихтилалында асыҡ беленде.

Ниәттәре киң ине Неплюевтың. Башҡорт ере Рәсәй өсөн хазина ғына. Ул урманы, ул мәғдәне, ул алтыны. Шуларҙы сығармаҡ, дәүләт ҡаҙнаһын байытмаҡ кәрәк. Заводтар һалырға, рудниктар асырға!

Екатеринбург яғындағы ҡаҙна заводтарының рәте юҡ. Эре предприниматель Демидов ишеләрҙең генә эше ыңғай. Башҡортостанда ла шул юлды һайларға! Быларын да уйлай, юллай башланы генерал-губернатор.

Ҡаҙна йомоштары менән 1753 йылды Петербургка килгәнендә заводтар һалыу мәсьәләһен Сенат менән Берг-коллегияла нигеҙҙә ыңғай хәл итеп сыҡҡас, Неплюев элекке дуҫы граф Петр Иванович Шуваловҡа инде. Ике ҡатлы колонналы матур һарайы Неваның Васильев утрауына ҡараған бейек яры башында ине. Тышҡы зиннәте, уратып алған баҡсалары тирә-йүнгә йәм биреп, гүйә хужаһының кемлеген, бай, атаҡлы дәүләт әһеле икәнен дә әйтеп торғандай. Хәҙер дандары бөтә Рәсәйгә генә түгел, Көнбайыш Европа илдәренә киң таралған Шуваловтар династияһының абруйы ғәйәт ҙур. Улар, өс бер туған ағалы-энеле

графтар, дәүләт күләмендә ҙур постар биләй, үҙҙәре императрица Елизавета Петровнаның яҡын фавориттары. Петр Иванович Шувалов дәүләт реформалары проекттарын төҙөшкән, хәрби эштәр менән етәкселек иткән дәүләт эшмәкәре. Ағаһы Александр Иванович иһә Йәшерен канцелярия начальнигы, генерал-фельдмаршал. Энеләре Иван Иванович Шувалов ғилем, сәнғәт донъяһында дан ҡаҙанған кеше. Фән, сәнғәт меценаты. Михаил Ломоносовтың иң яҡын дуҫы, Мәскәү дәүләт университетын асыу уйы менән йөрөгән кеше. Рәсәй Художество академияһына нигеҙ һалышыр инициатор, шуның буласаҡ президенты. Һәр хәлдә, Шуваловтарһыҙ, улар ҡатнашынан башҡа хәҙер Рәсәйҙә бер ниндәй ҙә ҙур дәүләт, хәрби, фән һәм сәнғәт эштәре башҡарылмайҙыр. Бүтәндәрҙең улар ярҙамына таянып эшләгәндә генә эштәре эш булыр.

Генерал-губернаторҙы Петр Иванович, үҙен генерал-фельдмаршал тип тормай, үҙ йорт-һарайы шарттарында һирәк килер ҡәҙерле ҡунаҡ күреп, дворяндарса ҡосаҡтарын йәйеп ихлас ҡосаҡлап, биттәренән үбеп, хөрмәтле ҡаршыланы. Ағаһы Александр Иванович та килгән икән – мәжлес ҡороп ултырған саҡтары. Кәйефтәре күтәренке, аруҡ ҡыҙмасалар.

Ҡунаҡтарын лакейҙары сисендереп, сайындырып, табынға ултыртышҡас та әңгәмәләре ҡыҙҙы китте. Пайтәхеттәләр шул – телсәр ине хужалар. Күберәк төртмәле-һынамалы һүҙҙәре.

— Ҡәҙерле Иван Иванович, бөйөк дәүләтебеҙҙең көнсығыштағы иң ҙур наместнигы, нисек, ҡырағай крайҙы цивилизацияға әйләндереп буламы? – шулай киҫтерә һорап ҡуйҙы Петр Иванович.

Әммә ҡунағының яуабы етди яңғыраны мәгәр:

— Хөрмәтле Петр Иванович, һеҙ күпте күргән олуғ дәүләт, хәрби коллегия башлығы, тураһын әйтәм: еңелдән түгел. Ҡырағай крайҙарҙы, инородецтарҙы цивилизацияға күндергәнсе, әгәр була алһа, унарлаған йылдар, бәлки быуат кәрәк. Улар ҙа аҙ булмаһа тағы. Империялар колонияларҙы метрополияға тиңләй алмаған һәм булмаҫтыр ҙа. Башҡорттарға цивилизация ғына түгел, ҡоршау, тимер ауыҙлыҡ кәрәк. Ҡалмыҡтарын, ана, суҡындырып-нитеп, урын-йыһаз менән әүрәтеп, эйәләштереп киләбеҙ. Ҡыр-ҡаҙаҡтарына ҡул етеңкерәмәй. Хандарын көйләү — үҙе бер дипломатия.

— Һеҙ дипломат-илсе кеше бит. Барыһы үҙ ҡулығыҙҙа. Уларға үҙ прәниге, үҙ ҡамсыһы хәжәт. Һүҙ менән түгел, әйбер менән майлағанды ярата улар. Инородецтарға нәсихәттән битәр ҡыҫым көс. Йыйыҡ хәрби линияһы менән урап алдығыҙ ҙа инде, тағы ни кәрәк? – Петр Иванович төпсөнә ине.

— Алыуын алдыҡ, ул ғына аҙ булып сыҡты. Эстә лә крепостар кәрәк. Башҡорт ерҙәренә заводтар һалырға, үҙебеҙҙең урыҫ крәҫтиәндәрен илтеп тултырырға кәрәк унда. Ерҙәрен алырға, үҙҙәрен ҡыҫырыҡларға. Шунһыҙ булмай.

— Завод тигәндән, бында дворяндар, аристократия араһында Урал заводтары тураһында һүҙ күп йөрөй. Предприниматель булып завод

һалыуҙың файҙаһы бармы? – тип һүҙгә ҡушылды Александр Иванович та.

— Файҙаһы бик ҙур, хөрмәтле Александр Иванович. Ҡаҙнаға ла, үҙеңә лә. Ана, Иван Твердышев менән Иван Мясниковтар үҙҙәре генә лә хәҙер башҡорт ерендә биш-алты завод тота. Оҙаҡламай Рәсәйҙә уларҙан да бай әҙәм булмаç. Шанлы Демидов заводсыларҙы уҙып китер улар. Мәғдән күп бит Башҡортостанда. Алтын-көмөш аяҡ аçтында ята. Бына әле Сенат менән Берг-коллегиянан заводтар һалыу буйынса өçтәмә льготаларға рөхсәттәр алып сыҡтым. Хәҙер предпринимательство заманы. Һеҙгә лә, Петр Иванович, Александр Иванович, тәхет тирәһе вельможаларынан, атаҡлы графтарҙан ҡалышмаçҡа кәңәш итер инем. Олуғ зат Шуваловтар кемдәрҙән кәм, Урал эсендә лә үҙ заводын тотмаçҡа? Һеҙҙән маяһына тейеш әжәре, беҙҙән – ҡалған хәстәре. Уңған управляющийын да үҙем табам, урынын да һайлашам, – Неплюев мауығып һөйләй ине. Шулай һүҙ яйы ла ипләнеп етди төç алды, ағай-эне хужаларҙы һөйләшеүҙән завод ҡорорға килештереү менән бөттө.

Был килешеү Неплюев өсөн ике яҡтан отошло ине: берҙән, Шуваловтарҙы үҙ крайына, үҙ компанияһына тарта, икенсенән, ниндәй хәл генә килеп тыуһа ла, уларға таянырға, яҡлау табырға мөмкин. Улар ярҙамында яңы чиндарға, пайтәхет ҡаршыһында яңы дәрәжәләргә тейенер, бәлки. Хыялы – Петербург. Еңеүсе даны менән ҡайтырға тейеш ул бында.

Шуваловтарҙың үҙ иçәбе. Ҡырҡ ҡына йәшен уҙғанда дан-шөһрәттең таждарын әләктереп өлгөргән граф Петр Иванович Рәсәйҙең иҡтисад, финанс, хәрби эштәре буйынса ҙур-ҙур проекттар яҙып, шуларҙы ғәмәлгә ашырып, иң юғары титулдарға ла, күрәлеп ингән байлыҡ, зиннәтле һарайҙарға ла эйә ине. Ҡулында үҙ заводтары, уптым алышбиреш итер эре сауҙа предприятиялары ла бар ине. Ләкин, нәфсеңә бирелһәң, дәрәжә һәм байлыҡтар кемде лә аҙҙыралыр инде – Бестужевтар, Разумовскийҙар менән байлыҡ-зиннәттә, бриллиант-алтында самаһыҙ ярышҡан булып, һыу урынына аҡса-мал түкте, миллиондарын заяға осорҙо һуңғы йылдарҙа. Генерал Апраксиндың ҡыҙы Куракина княгиняны һөйәркә итеп, көн-төн ғиш-ғишрәт ҡылып, күпме мал-мөлкәтенән яҙҙы, юғары даирәләрҙә исем-дәрәжәләрен төшөрҙө. Аҡылға ултырырға ваҡыт ине графҡа. Дан-шөһрәтен кире ҡайтарыр ул. Оҙаҡламай үҙен Рәсәйҙең ҙур хәрби начальнигы итеп тәғәйенләрҙәр, генерал-фельдмейстер тигән иң юғары дәрәжә бирерҙәр, тағы байлыҡ тупланыр.

Александр Иванович та энеһенән ҡалышмаçҡа тейеш. Неплюев димләгән заводтар ҡорорға ла аҡса һалырға кәрәк. Берҙе түгел, ике заводҡа. Сығымы бер-ике йылда ҡайта, ти бит. Унан табышы үҙенәнүҙе ағыр. Елизавета Петровна ғәли йәнәптәре ҡаршыһында ағалы-энеле Шувалов графтар заводтары тигән исеме ҡиммәт. Императрицаны тәхеткә ултыртҡан саҡта Преображенский полкында иң яҡын таяныстары, аҙаҡ фавориты булып йөрөргә генә аҙ хәҙер, шан-шәрәфтәргә ашҡас та шуларҙы һаҡлай, арттыра барыу олуғ аҡыл. Килмешәк

Остермандар, Филкенштейндар нәҫеле түгел, саф рустар заты Шуваловтар һынатмаҫ. Үҙ илдәренә фәҡәт үҙҙәре хужа булыр.

Үҙенән бигерәк Неплюев хаҡында уйланды Шувалов. Рәсәй тип ғүмерен бағышлаған рус дворяны. Остермандар тирәһендә уралып-буталып янды. Ырымбур уға, исем-титулдары ҡайтарылһа ла, һөргөн хөкөмөндә ине. Ун йылдан артыҡ ғүмер шунда. Ҡырағай ҡәүемдәр, басурмандар араһында ҡырыҫланып киткән. Олоғайған – ҡайғы-хәсрәттәре, ауыр эштәре баҫалыр. Империяның сиктәрен һаҡлау, баш бирмәҫтәрҙе буйһондороу еңелме ни? Империя икән – ҡан түгеүһеҙ булмай. Үҙе баш булған Йәшерен канцелярия – шуның бер ҡоралы бит. Унда күпме йән ҡыйыла. Ил белмәй, үҙҙәре генә белә. Үлем язаһы юҡ, имеш. Рәсәйҙә, цивилизация илендә, яза-үлем – үҙҙәре ҡулында. Ҡол булмай, баш эймәй маташҡандар баштарын һалырға тейеш. Ҡолһоҙ империя юҡ!

...Үҙҙәре пайтәхет Петербургта, зиннәтле һарайҙарында ғына йәшәгән лейб-гвардия полковнигы, Рәсәй Йәшерен канцелярияһы начальнигы Александр Иванович Шувалов Неплюев менән һөйләшкән йылды уҡ Эйек-Покровский баҡыр заводын һалдыра ла башланы. Энеһе, булаһы генерал-фельдмейстер Петр Иванович шул йылды Әүжән-Петровский тимер заводына нигеҙ түшәтте. Хазиналарынан аҡса бүленгән, ҡалғаны – управляющийҙарының эше. Әүжән йылғаһының Ағиҙелгә яҡын Баштау осонда, әллә бер йыл үтте, әллә юҡ, Әүжән-Петровский заводының бер мейесе, ҙур-ҙур йорттары, тирәһендә эшсе өйҙәре ҡалҡып та сыҡты. Петр Иванович Шуваловтың компаньондары Корней Матвеев менән Тимофей Матинский шәп ине шул. Дәүләт әһеле граф үҙе, заводының ҡайһы тарафтараҡ икәнен дә йүнләп белмәгән, хатта ул хаҡта уйларға ла ваҡыты юҡ кеше, бар эшен шул ҡулдаштарына тапшырған. Дөрөҫө, бар хәстәр, күҙәтеү эше управляющий Тимофей Матинский ҡулында.

Эштәре яйға һалынып, әлеге бер домна мейесе сеймал, күмерҙәрҙе йотоп, өҙлөкһөҙ төтәй башлағайны, шул тимер заводын баш күтәргән башҡорттар 1755 йылдың көҙөндә үк туҙҙырып ташлай.

Тарих үс ала.

Тарихтар ҡабатлана.

Ихтилал ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Август урталарында бөрйәндәргә тамъяндар, түңгәүерҙәр, ҡыпсаҡтар һәм үҫәргәндәр килеп ҡушылды. Төньяҡлап ҡатайҙар ҡуҙғалды. Юрматылар менән табындар көньяҡ тарафына, Көңгәк ҡарай Ағиҙел бөгөлөнә табан тартылды.

Бөгөлсәндән ары Нуғай юлы башҡорттарының атлы-ҡораллы ҙур-ҙур төркөмдәре туплана ине. Ойошҡанлыҡ, хәрби тәртип күренә. Һәр ырыу-иләүҙең үҙ ун, йөҙ башлыҡтары. Электән килер тыуҙары бар. Сиреү урдуғаһы юғарыраҡ, Ағиҙел менән Эйек араларында. Ләкин ғәскәр башлығы юҡ. Сөнки, регуляр ғәскәрҙәге шикелле, ихтилалдарҙың ойошҡан ләшкәре бар тип әйтеүе ауыр. Иләүҙәрҙән баш күтәргән башҡорттар һыбай килә тора йә теге йәки был үҙ төбәгендә ойоша тора, үҙ старшиналары йә сотниктары башлығында яуға инә тора. Уларҙы

берҙәм хәрәкәткә бәйләр, бер-береһенең хәлен белеп торор бәйсе сапҡындары, кәңәшләшеп алыр өсөн яу башлыҡтары бар. Һәр хәлдә, әле ҡайһы иләүҙең ҡайһы заводҡа һөжүм иткәнен йәки яндырғанын, почта стандарын туҙҙырып ташлағандарын, яу усаҡтарын белеп-ишетеп торалар. Батша ғәскәрҙәре килер, карателдәр үтер ҡайһы юлдарҙың кемдәр күҙәтеүе аҫтында һәм уларға кемдәр ҡаршы төшөргә тейеш икәнен дә яҡшы беләләр. Шулай ҙа ихтилалдың төп урыны заводлы-ҡәлғәле Урал тауҙары эсендә, Ырымбур—Йайыҡбаш тракты өҫтөндә ине.

Неплюев губернатор башҡорт араһына йәнә тағы бер таш ташлай. Әлеге яу сыҡҡан йыл башында Сенаттан һәм Хәрби коллегиянан Башҡортостан эсендә, Йылайыр йылғаһы буйында бер крепость төҙөтөү һәм Урал аръяғы дистриктын барлыҡҡа килтереү проектын раҫлатып ала. Сапсал, Урал стандарын туҙҙырыу был эште тиҙләтергә мәжбүр итә. Талҡаҫ буйындағы боланы баҫтырырға ебәрелгән Бахметьев бригадир отрядын генерал-губернатор Йылайыр янында һалыныр ҡәлғәһенә ебәрә. Ырымбурҙан Поспелов тигән инженеры менән төҙөүселәре килеп төшә. Өҫкә ауып килгән урманын йығып, крепосын төҙөй ҙә башлайҙар былар. Майҙанын таҙарталар, йорт-ҡәлғә урындарын ҡаҙыталар, ағас-ташын ташыйҙар. Тағы шул тирәләге башҡорттарҙы килтереп эшкә ҡушалар. Ылауҙары менән. Бер муйынға ике элмәк – ҡәлғәһен дә һал, быҕауын да ал. Үҙ ереңүҙеңә имгәк.

Ергә хужа булып алған илбаҫар яман ҡылана. Уға ер-һыу йәлме ни, барыһын вата, емерә, ҡәлғәһен ҡора. Уға урманын үртәп юлдар һала, йылғаһы аша таш күперен түшәй. Башҡорттоң илен, уның үҙенең ҡул-аяғын сырмай.

Йөҙ кешелек отряды менән һаҡлап ҡәлғәһен һалдырып ятҡан Бахметьев ашыҡтыра – ер туңғансы йорттарын һалып, нығытмаларын ҡороп өлгөрмәк кәрәк. Әлегә йәй асығында ятып, землянкаһында тороп йәшәргә лә ярай. Ҡышҡылығына аҙыҡ-түлеген, фураж, провиантын килтерәһе бар.

Икенсе көндө Бәрәкәл почта ямының яндырылыуына үҙе шаһит булды. Шаһит булды, ләкин шуныһы аяныс – үҙе бер ни ҙә булдыра алманы. Ун берендә Преображенский заводының яндырылыуын ишетте. Унан Вознесенскийҙы... Бунт ҡына түгел, оло восстание был. Утлы ҡулса үҙ ҡәлғәһен ялмап ҡамай килә хәҙер.

Әммә Бахметьев ебеп ҡала торғандарҙан түгел. Бар гарнизонын аяҡҡа баҫтырып, ҡасып ҡайтҡандарҙың һәммәһен туплап, тиҙ арала ҡәлғәһен ҡурғау хәленә ҡуйҙы. Ҡыҙыл ҡәлғәһенә йәһәт сапҡын ебәрҙе. Йайыҡбашҡа юлланы. Ярҙам килгәнсе бирешмәҫкә. Ҡаршылағы таш ҡаялай ҡаты торорға! Урынында таш булып ҡатырға – сигенәһе түгел. Уға юлы ла юҡ. Шулай ҡаты ҡарар ҡылды бригадир.

Йылайыр гарнизоны былай ҙа поход хәлендә – көн-төн аяҡ өҫтөндә. Ҡәлғәһен дә ҡороша, һаҡлай ҙа. Кәрәк икән, ҡурғаясаҡ. Бахметьев генералдан ҡала оло чины – бригадир башы менән ҡалала тороп

командалыҡ ҡылаһы урынға, әллә ҡайҙа, тау-урмандар эсендә, таш араһында ҡәлғә һалышып ята. Йәшәгән урыны – землянка, ашағаны – һалдат кухняһы. Теләһә ҡайҙа ятып, ҡара эштәрен дә эшләп йөрөгәндә бысранып-туҙып бөткән мундирына ҡарағанда, һары һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йөҙҙәренә баҡҡанда бригадир икәнлеген йүнләп танып та булмай. Әйтерһең, фронт шарты. Болала унан да былайыраҡтыр әле. Яр аҫтынан ҡупҡан яуҙың ҡасан, нисек сығырын белерһеңме. Әлдә шуныһы яҡшы: һалдат-драгундары баштан-аяҡ ҡораллы, провианттары етерлек. Офицерҙары сымыры. Уҡ-һаҙаҡлы башҡортҡа мылтығы, тубы әҙер. Ҡамауҙа оҙаҡ ҡалырға генерал-губернатор яй ҡуймаҫ. Ана, подполковник Лесток менән майор Уваровтың  ике пушкалы пехота батальоны ярҙамға сыҡҡаны ишетелде. Ырымбурҙың өс ғәскәр полкының секунд-майор Боргентрейх башлығында ике пушка менән мең дә дүрт йөҙ кешелек команда киләсәк. Өфө өйәҙенән регуляр һәм регуляр булмаған командалар юлда тинеләр. Килеп кенә етһендәр, күҙ ҙә астырмай ҡырып ташлаясаҡтар.

Көсөкбай һыбайлыларының тупланған урыны тау эсендә. Покровский заводын ҡыйраҡас, эҙ яҙҙырып, төпкәрәк күскәйнеләр. Һилүәт ерҙәр. Дошман ҡапыл баҫмалы йә уратып алмалы түгел. Тирә-яғы ҡурғау.

Көсөкбай батыр һыбайлылары шулай көс йыйып төптәрәк ятһалар ҙа, Йылайырҙан алып Әүжән-Петровский заводына  тиклем үҙәк өлөштө, Преображенский менән Сапсал тракты араһын үҙ күҙәтеүҙәре аҫтына алғайнылар. Һәр тарафта яйлы тау башы һайын үҙ пикеттары ҡуйылған. Тракт,  бөтә эреле-ваҡлы  юлдар юлбағырҙар ҡарауында. Һәр ҡайҙа – ҡарауыл, һәр ерҙә – бағауыл: бер генә дошман отряды ла күҙгә салынмай ҡалмаҫ. Бигерәк тә Йылайыр ҡәлғәһе тирәһен ныҡ күҙәтәләр, сөнки регуляр ғәскәр килер, ҙур ҡурҡыныс  тыуыр юл шунан.

Бахметьев белеп-тойоп тора башҡорттарҙың боҫоп күҙәтә ятҡанын. Уларға атлы гарнизонын юл сығарып сәп урынына ҡуяһы килмәй, үҙе көтә. Ырымбурҙан өҫтәмә көс һаман килеп етмәй. Ә Әүжән-Петровский заводы ашығыс ярҙам һорай, көн-төн саң һуға.

Бер рота драгун килеп етте, ниһайәт. Ләкин юлда өҙлөкһөҙ һөжүмгә осрап, бик ныҡ ҡаҡшаған, һирәгәйгән ине. Әммә бүтәнсә бер ни эшләр хәл юҡ, Бахметьев уны күпмелер тулыландырып, илле Дон казагын ҡушып, капитан Шкаповский башлығында Әүжән-Петровскийҙы һаҡларға ҙур отряд итеп ебәргән булды. Бригадир уның сыҡҡанын, ҡайһы юлдан киткәнен башҡорттарға һиҙҙертмәҫ  өсөн бөтә һәләтен һалырға тырышты.

Шундай һаҡ, шундай шым үтә ине драгун ротаһы йәшертен юлын. Хәтәр төбәктәрҙән уҙып, хәүефһеҙ тау эстәренә килеп керҙеләр шикелле инде. Юлдарында бер бөртөк мал, кейек, әҙәм эҙе юҡ, тирәяҡта шик һалыр бер тауыш-фәлән сыҡһасы. Эҙҙәрен йәшерә, үҙҙәрен һаҡлай имен-аман үттеләр былай булғас. Ун сәғәттәй ауыр юл уҙа-уҙа талсығып, аттары арып, әҙәм бейеклеге ағайрыҡ үҫкән кескәй аҡланға тамаҡ ялғарға, аттарын ашатып һуғарырға, хәл алырға туҡталғанда, шулай кис үтеп, иркен тын алдылар ахырҙа. Казактарҙың шатлыҡта-

рынан аҙыраҡ араҡы эсеп алырға, ҡыуаныстарын йыуырға ниәттәре ҡуҙғалып ҡуйҙы хатта. Тик унтер-офицерҙары тыйҙы, капитандары заводҡа барып еткәнсе, аҙаҡҡаса һаҡ булырға бойорҙо.

Һаҡтан сос уяу. Йылайырҙан йыраҡ түгел ташландыҡ урман юлын иҙеп-тапап үткән ҡара эҙҙе, эҙ буйынса ротаның үҙен – драгундарын, казактарын, аҙыҡ-түлекле, ҡоралды арбаларын – күптән күреп алғайны инде юлбағыр башҡорттар. Хәбәр шундуҡ төп ҡорға еткерелде. Аҡсура алъюртаҡтары драгундарҙың Әүжән-Петровский ҡарай барыр юҫығын, уға үтер берҙән-бер уңай үткәүелен тиҙ асыҡланы. Ҡапҡанды нәҡ шунда ҡорорға. Ҡамап, ары үткәрмәй, шунда ҡырырға. Был бурыс Көсөкбай батыр яугирҙарына тапшырылды. Улар үҙҙәре – ҙур көс, ғәййәр көс. Ҡапҡанын да һалыр, йәнлеген дә алыр.

Көсөкбай менән Сыртлан һыбайлылары үҙҙәре ятҡан ерҙән бары ун саҡырымдар ары үткән үткәүеленә саптырып барып та еттеләр, ике тау килеп ҡушылған ҡыҫыҡтың ике яғына, таш-ҡаялар артына йәшеренеп тә яттылар. Көсөкбай батыр яугирҙары – үткәүелдең тауҙы киҫеп асыҡлыҡҡа сығыр төбөнә, Сыртландыҡылар – Йылайыр яғынан килер ауыҙына.

Драгундар ҡыҫыҡҡа инеп китеү менән һуғыш ҡупты. Алыштың иң ҡатыһы үткел башында ине, моғайын. Асыҡ һуғыштың тап үҙе.

Капитан Шкаповский үҙе арьергардтан төшкәйне. Үткәүелдә аңғармаҫтан ҡапыл һуғыш башланып киткәс тә аптырап ҡалманы. Үҙ тирәһендәге паниканы тиҙ бөтөрҙө. Йәһәт кенә арт юлды асмаҡсы итте. Ләкин беренсе ебәргән драгундары ауыҙҙа уҡ ямғырына, таш аҫтына эләгеп, тегеләй ҙә, былай ҙа үтеп сыға алмайынса, ятып ҡалды. Уның ҡарауы, ҡайҙан уҡ-таш яуҙырылыуын, ни тирәгә боҫҡанын тәғәйен күреп алды ла мылтыҡтарҙан бер нисә залп бирҙерҙе. Бер тубын нисек тә ҡорҙороп, ауыҙҙа йәшеренеп ятҡан ҡая башына бер ике йәҙрә лә аттыра алды ул. Эштәре харап икәнен аңлап алған башҡорттар мылтыҡтан, уҡтан атып, тупсыларын сафтан сығарҙы, бүтәндәренә килеп ҡорорға башҡаса ирек ҡуйманы. Ошо буталыштан файҙаланып, Шкаповский үткел башына икенсе тапҡыр сапҡын ойоштторҙо. Уға арттағылары эйәрҙе.

Башҡорттар өсөн киҫкен хәл килеп тыуҙы. Ҡамауҙы өҙмәҫ өсөн, көстө яңыса туплап өлгөрөргә кәрәк ине. Көсөкбай батыр үҙәктән Атанғол Туғандың командаһынан ҡырҡ-илле кешене алғы ҡыҫыҡҡа бик тиҙ арала күсерергә бойорҙо ла үҙ атлыларын драгун ротаһының йырып сыҡҡан һыбайлыларына бурорға булды.

Резерв әҙ ҡалдырылғайны. Улар кире сапҡан драгундар юлын бүлде. Ҡылысҡа ҡылыс, һөңгөгә һөңгө килеп, ҡаты һуғыш башланды. Ә арттан драгундар һаман килеп өҫтәлә тора, башҡорт һыбайлыларын дөрөп бара. Көстәр тигеҙ түгел.

Драгундарҙың сигенеүсе өҫтөн көсөн шулай ҡан-йән менән күпмеләр туҡтатып торғансы, Көсөкбай һыбайлылары ла аттарына атланып, дошман сафына урталай бүҫеп инде, йәшен тиҙлегендәй ҡылыстан сабыш, һөңгөнән сәнсеш ҡыҙҙы. Аттар аяғы аҫтына кәүҙәләр ауып

төштө, баштар өҙөлөп тәгәрәне. Һөңгөгә сәнселеп, мәхшәр эсендә йән бирҙеләр.

Көсөкбай һыбайлылары хәл итте яуҙың яҙмышын.

Әйтәһе түгел, Көсөкбай – алпар затлы батыр. Унын айбарлығына тиңдәр аҙҙыр был тирәлә. Йәнә алпарына күрә толпарысы – үҙе ир-ат ҡанаты. Ана, батыр яуҙаштарын үҙ артынан эйәртеп, иң хәтәр урындарға ярып инә. Дошман уртаһында ҡамалып ҡала. Әйләнеп-тулғанып һуғышыуын белә. Ике ҡулында ике ҡылыс. Өҙәңгеһе менән тибеүгә өйрәнгән аты теләгән яғына әйләнә тора, йә уң, йә һул ҡулындағы ҡылысынан ике яғында, алдында-артында ла кәүҙәләр эйәрҙән ауып төшә тора. Бүтәндәре ситкә һыпырылғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

Драгундарын ҡырып килгән был һыбайлыны капитан күреп тә алды. Үҙҙәренекенә ниндәйҙер команда биреп ҡысҡырынды ла атын Көсөкбайға табан борҙо. Ҡалҡаны менән ҡапланып, ауыр палашын аҫтан артҡараҡ киҙәнә биреп алға йүнәлде. Йәнәшендә тере ҡалҡаны – адъютанты.

Ул арала һуғыш та тыныр. Батырҙың яугирҙары, ҡоралдаштары Шкаповский капитандың 120 кешелек драгун ротаһын, 50 кешелек Дон казактарын аҙағынаса ҡырып бөтөрөр, еңеү шатлыҡтарын кисерер.

Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Башҡорттар үҙҙәренең 32 үлгән ирҙәрен, шулар араһында Көсөкбай батырҙы, Аҡсураны һәм Ҡусҡарҙы арбаларға тейәп, тыуған ерҙәрендә ерләргә юл алыр.

Ҡайғынан эйелгән баштар күтәрелеп күккә ҡараһалар, зәңгәр күк төпкөлөндә саңҡ-соңҡ итеп ҡанаттарын тын йәйгән ғорур бөркөттө күрер ине. Бөркөт йөрәкле батырҙарҙың йәне шулай бөркөткә әйләнеп осоуылыр ул.

## Генерал-губернаторҙың яр һалыуҙары

Башҡорттарҙың йәнә баш күтәреүе Рәсәй пайтәхетен дер һелкеткәндәй итте. Неплюев яҙған йәшерен донесениелар уҡылғас, Сенат менән хөкүмәт, Хәрби коллегия оло хәүефкә төштө. Илдең көнсығышын болалар ҡаплаһа, мосолмандар бергәләп ҡуҙғала башлаһа, эштәр харап. Ашығыс саралар кәрәк.

Рәсәйҙең көнбайышта һуғышҡа әҙерләнеп ятҡан сағы. Елизавета Петровна тәхеткә ултырғас та Көнбайыш Европа илдәре алдында үҙенең ҡеүәтле илдең императрицаһы икәнен танытырға тырышты. Ул заман Австрия тәхет мираҫы тирәһендә сәйәси хәлдәр ҡуйырып киткәйне.

Австрия императоры Карл VI, Австрия, Венгрия, Чехия, Көньяҡ Нидерланд, Төньяҡ Италия ерҙәре ингән ҙур биләмле империяһын Габсбургтар династияһының бүленмәҫ иле һәм унын тәхете киләсәктә ҡыҙы Мария-Терезияға күсергә тейеш, тип иғлан иткәйне күптән. Ләкин Карл VI вафат булыу менән был империяның ерҙәрен бүлгеләп алырға теләүселәр күбәйҙе. Пруссия короле Фридрих II Австрияның үҙәк өлкәләренә, Чехияға тиклем хәрби поход ойошторҙо. Англия менән Рәсәй Австрияны яҡлап, һуғышҡа ҡатышып китергә мәжбүр булды.

1755 йылда сәйәси-хәрби ваҡиғалар тағы ла ҡатмарлашты. Ҡеүәтләнеп алған Пруссия яңынан Австрияға ҡатыраҡ янай башланы, һуғыш менән ҡурҡытты, Рәсәй элеккесә Австрияны яҡланы. Король Фридрих II–нең Польша аша Рәсәйгә лә һөжүм итеү ҡурҡынысы бар ине. Рәсәй шашынған пруссактар алдында үҙенең кемлеген күрһәтеп алырға ла, Көнбайыш Европа ерҙәренә яу менән инергә лә бик теләй ине эстән. Шулай, аҙаҡ ете йылға һуҙылыр ҡаты һуғыштарҙың ҡара һөрөмдәре ҡуйырған, һәр ил ҡорал ҡайраған, ғәскәр туплаған көсөргәнешле саҡ ине был заман.

Ҡурҡҡанға ҡуш күренер, ти. Генерал-губернатор Неплюев әллә үҙе ысындан да ныҡ ҡурҡҡанға, әллә бер яйҙа хәрби көс туплап, үҙен күрһәтеп ҡалырға теләп, башҡорт ихтилалының ҙурлығын һәм ҡурҡынысын хөкүмәт алдында байтаҡ ҡабартып баҫтырҙы, буғай. Мосолмандар берләшә, коалиция ҡора, христиандарға ҡаршы йыһат башламаҡсылар, башҡорттар шуның ҙур суҡмары, тиеберәк яр һалды ул. Батыршаның губернатор ҡулына эләккән бер дана мөрәжәғәтенән, император һәм батшаларҙың ҡеүәтле фармандарындай тойоп, тамам ҡото алынғайны Иван Ивановичтың.

Башҡорттар ҡуҙғалышы башланған осорҙа губернала Неплюев ҡарамағында 24 мең кешелек ғәскәре бар ине. Ул үҙе 13 регуляр полктан һәм 10 мең кешелек регуляр түгел сиреүҙән ғибәрәт. Өҫтәүенә, Яйыҡ һәм Дон казактары ғәскәренән ике мең атлы, Ставрополь ҡалмыҡтарынан бер мең һыбайлы ҡушылырға тейеш. Йәғни, йәмғеһе йөҙ меңлек ғәскәр – үҙе бер ҙур армия.

Юҡ, генерал-губернаторға был ғына аҙ. Уға күп кәрәк. Неплюевтың юллауы буйынса, Сенат уға тағы өс драгун полкы ебәрергә ҡарар итте. Пенза ҡалаһынан Владимир полкын, Шацкиҙан – Әстерхан, Алатырҙан Азов полктарын. Улары биш меңгә яҡын ҡоралды драгун. Хәрби коллегия, тағы Неплюев һорауы нигеҙендә, Ырымбур крайына биш полк ебәрергә йыйына. Мәскәүҙән – Курск, Ярославлдән – Вятка менән Себер, тағы Ростов полктарын. Былары үҙҙәре ун меңлек регуляр ғәскәр. Улары ғына етмәгән, ул йәнә Дондан ике мең казак һората. Ҡазан яғы татарҙары биш мең татар сиреүе ебәрә. Шулай итеп, ике-өс аҙна эсендә Неплюев Ырымбур губернаһында утыҙ меңлек регуляр ғәскәр, егерме меңлек ҡоралды сиреү туплай. Йәмғеһе 50 меңдән ашыу армия. Әйтерһең, үҙенә Пруссия короле Фридрих армияһына ҡаршы сығырҙай армия йыямы ни, үҙен баш командующий итеп күрһәтергә йыйынамы ни! Рәсәй ҡул аҫтындағы табиғ ҡолдарҙы, ҡоралһыҙ-ниһеҙ, сиреүһеҙ башҡорттарҙы баштан-аяҡ ҡоралды регуляр армия менән ҡырып бөтөрөргәлер уның ниәте? Түгел икән, ниңә уға шунса армия?! Ғәйрәтен күрһәтергәме?

Улай ғына булһасы! Илле меңлек армия менән башҡортҡа яу асып, фронт тотмаҡсы ул. Ғәскәрҙәре менән генерал-майорҙары, бригадирҙары, полковниктары, һанһыҙ офицерҙары килеп етә Башҡортостан ерҙәренә. Генерал-майор Иван Салтыков армияның башлығы – команду-

ющийы итеп тәғәйенләнә. Полктар башҡорт иләүҙәренең үҙәгенә поход сыға. Рәсәй армияһы үҙенсә фронт ҡороп, хәтәр яу асмаҡсы. Башҡортостанды бар тарафтан уратып, Ҡазан яғынан – граф Головин ғәскәре, төньяҡтан, Екатеринбургтан – действительный статский советник Щербинин етәкселегендәге ғәскәр, Себер тарафынан тағы бер ғәскәр поход башларға әҙер торорға тейеш. Барымталап яуға килер өсөн Неплюев Ҡаҙағстан яҡтарынан Кесе йөҙ ханы Нурали менән һөйләшеү алып бара.

Рәсәйҙең шулай йөҙ меңгә етер армияһын Башҡортостан еренә килтереп, сиктәренән уратып, ҡот осмалы һуғыш, башҡорттарҙы һуйыш башлатмаҡсы Ырымбур генерал-губернаторы. Ҡыр-ҡаҙаҡ, татар, башҡорттарҙы үҙ-ара талаштырып, дошманлаштырып, ҡеүәттәрен бөтөрмәксе. Башҡорттарҙың тоҡомон ҡоротор өсөн ҡорған иң яман, иң мәкерле геноцид сәйәсәте ине былар.

Донъяла изге йәнлеләрҙе яҡлар һәм яман менән яҡшыны күпмелер тигеҙләр илаһи мизан, тәртип-мизан да йәшәр. Шунһыҙ гонаһлы донъяла нисек йәшәмәк кәрәк?

Хоҙайға шөкөр, Неплюевтың яман уй-ниәте Аллаһы тәғәлә ихтыяры арҡаһында ғәмәлгә ашып етмәне. Һәр хәлдә, ул теләгәнсә килеп сыҡманы. Сенатта ла яҡшы теләкле түрәләр, аҡыллы политиктар юҡ түгел икән – шулар тыя төштө генерал-губернаторҙың яман ниәттәрен. “Башҡорттарҙы фәҡәт ҡорал менән түгел, бәлки, күберәк аҡыл, өгөт-нәсихәт менән яман эштәренән дүндерергә кәрәк, – тинеләр уға. — Рәсәй армияһы башҡортҡа ҡаршы һуғышмаһын”.

Манифест һәм указдарҙы күп ишетте инде ул башҡорт. Тик уларҙың башҡорт мәнфәғәтен ҡайғыртҡаны булманы, йә ҡоро исем өсөн генә ине күбеһе. Батшаның батшаһы вәғәҙәләр бирҙе, әммә ләкин уларҙың береһе лә бығаса йүнләп үтәлмәне; һанаттары, яран-түрәләре алдап-йолдап йыш ҡына ҡаҡҡа ултыртты. Ҡағыҙға, буш һүҙгә ышаныс юҡ.

Шуға был юлы ла, манифестарға ҡарамай, ихтилал йәй, көҙ буйы дауам итте, Башҡортостан һаман ут эсендә ине. Хөкүмәт ут божраһын сикләр, бүтән халыҡтарҙы башҡорттарға ҡаршы һөсләтер өсөн төрлө әмәлдәр эҙләне. Хужа этенә һөйәк ташлаған шикелле, батша татарҙарға бер нисә ташлама яһаны. Ошо уҡ йылдың сентябрендә татарҙарға төбәп өс махсус манифест сығарҙы. Береһендә Башҡортостанда йәшәгән татарҙарға болала ҡатнашҡан башҡорттарҙы хөкүмәткә тотоп бирергә, улар ерен үҙҙәренә беркетергә вәғәҙә итте. Мал-мөлкәттәрен алырға, ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарын әсир ҡылырға рөхсәт бирҙе хатта.Ҡазан татарҙарын ауыр лашман хеҙмәтенән, байтаҡ яһаҡтарҙан бушатты, суҡындырыу сәйәсәтен сикләне, өҫтәмә рекрут алыуҙы бөтөрҙө, мырҙа һәм йомошсо татарҙарға еңеллектәр вәғәҙәләне.

Илгә ҡушылған – ир, илдән айырылған – хур, әлбиттә. Ҡанлы яу һәммәһен һынай. Тәүге ҡаты алыштар, ҡан ҡойоштар иләү халҡын икегә бүлде. Ил-йорт ирке тип йәнен аямаҫ ир-егеттәр, ғәййәр батыр-

ҙар сая старшиналар тирәһенә ойошто, аҙаҡкаса сигенмәҫкә ҡарар итте. Күптәре, баштарыбыҙҙы, ғаиләләребеҙҙе һаҡлайыҡ тип, бала-сағаларын алып, мөмкин ҡәҙәренсә йорт-йыһазын, тирмәһен тейәп, малдарын әйҙәп, Яйыҡ аръяғына, ҡаҙаҡ араһына ҡасыуҙы хуп күрҙе. Шулай итеп, май айында ҡасып киткән бер төркөм эҙенән август уртаһында бөрйәндәрҙең мең кешенән ашыу ҙур бер иләүе йәнә ҡаҙаҡ далаһына китергә булды. Улар артынан оҙаҡламай иләү-иләүе менән түңгәүерҙәр, ҡыпсаҡтар эйәрҙе. Урман-тау араһына йәшеренеп, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышыр, йорт-ерҙәрен һаҡлар өсөн улар һайлам атлы ир-егеттәрен генә ҡалдырҙы.

Август айында көньяҡта Ҡыуат Кинйәғол, Теләүем Яуғасты старшиналар командаһындағы үҫәргәндәр почта стандарын, айырым каратель отрядтарын ҡыйраттылар ҙа, батша ғәскәренең төп көстәре килеп еткәнсе, бөтә ил-йорттары менән ҡубарылып, өйөр-өйөр малдарын әйҙәп, Орск крепосынан үрҙәрәк Яйыҡты кисеп, ҡыр-ҡаҙаҡ далалары эсенә инеп юғалдылар. Ҡара яу килеп баҫмаҫ борон, Ырымбурға яҡын башҡорт ырыуҙары тиҙерәк ҡаҙаҡтар араһына барып һыйынырға ашыға ине. Каруан күсер – ут ҡалыр, ырыу күсер – йорт ҡалыр, тигән шикелле, күп ауыл, йәйләүҙәр бушап, урындарында йорт-ҡуралары, ер-һыуҙары етемһерәп ятып ҡала ине. Китер юлда осраған ваҡ-ваҡ отрядтар, кисеүҙәрҙә ҡәлғә, редут командалары менән киҫәк-киҫәк ҡанлы алыштар булғылап, ер ҡаплап килер атлы-арбалы, бала-сағалы, мал-тыуарлы ҡасаҡтар иләүе арҡыры төшкән ҡораллыларҙы ла ҡырға быраҡтырып үтә ине барыбер.

Яуҙа ҡатнашһа-ҡатнашмаһа ла, иләү барыһын бергә күтәрә. Ҡалырҙар, ҡаршы торорҙар ине, ҡырым сиреүендәй ишле батша ғәскәрен – ҡара яуын ҡырып бөтөрөрлөк түгел, үҙең ҡырылып юҡҡа сығыуың көн кеүек асыҡ. Ирекһеҙҙән ир-егеттәр ҙә ғаиләләрен, малдарын алып ҡасырға мәжбүр. Аҙашһаң да ил менән аҙаш, тигәндәре шулдыр, бәлки. Ике хәтәрҙең береһен – ҡотолмаға ихтималы барын һайларға тура килә. Ғаиләләрен, тоҡомдарын һаҡлайым тип ут менән һыу эсендә ҡалған ил ағаларын, ир-егеттәрен дә ғәйепләп булмай. Илдә ҡалғанды яу сабыр, илдән киткәнде ят баҫыр икән – икеһе лә ауыр.

Күкрәктәре менән ҡалҡандай ҡаплап йорт-ерҙәрен һаҡларға ҡалған, ил-йорт баҫҡынсыларына ҡотороноrға ирек ҡуйырға теләмәгән батырҙар тиңһеҙ алышта тағы ике-өс ай буйына ябырылып килгән батша ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡанлы-үлемесле яу алып барҙы. Туплы-ҡораллы ғәскәрҙәр юлда туҡталып ҡалырға, һағыраҡ эш итергә мәжбүр булды. Төп көстәр заводтар тирәһенә тупланды.

Сентябрь башында башҡорттар йөҙ илле һыбайлылар командаһы менән оло юлдағы, Ырымбурға иң яҡын Преображенский заводына икенсе тапҡыр ҡеүәтле сапҡын яһаны. Заводтың гарнизонын, килгән командаһын ҡыйратып ташланы. Завод яңынан янып, туҙып ҡалды.

Октябрь башында дүрт йөҙ кешелек башҡорт яугирҙары Кананикольский заводына бәреп инде. Заводтағы, оло юлдарҙағы каратель

отрядтарын ҡырып үтте. Әллә күпме йылҡы малы, бүтән улъя, ҡорал-яраҡ ҡулға төшөрҙө. Бындай сапҡын бер ай эсендә ике-өс тапҡыр ҡабатланды.

Ҡара көҙҙө, егерменсе октябрҙә, башҡорттар Вознесенский, Әүжән-Петровский заводтарын яңынан ҡамап алды.

Көҙҙән ҡышҡа ингәнсе, 1755 йылдың аҙағына саҡлы Көньяҡ Урал тау араларында, ҡара урман эстәрендә регуляр батша ғәскәрҙәре менән ҡаты һуғыштар барҙы. Башҡорттарҙың ғәййәр улдары, ил батырҙары ил тип, ирек тип, баш һалмай, йән аямай аяуһыҙ көрәшәләр ине.

## Батыршаны эҙләү, эҙәрләүҙәр

Милади мең ете йөҙ илле бишенсе сәнә суҡа йылының көҙө мөсәленә күрә һалҡын ямғыр-ырашҡылары, батҡаҡ-бысраҡтары менән болаыңҡы килде. Миҙгеленән бигерәк ил йортоноң болалы мәле ине һаман. Урал тау эстәрендә завод-кәлғәләргә һөжүмдәр, юҫыҡ-юҫыҡ сапҡындар дауам итте. Яйыҡты ике яҡлап барымталар, ҡарымталар, ҡапыл ҡалкҡан ҡойондай, өйрөлтөп-айҡатып үтте. Сик буйҙарында батша отрядтары менән әленән-әле бәрелештәр була торҙо. Һаман ҡандар ҡойолдо, йәндәр ҡыйылды.

Көҙгә ҡаты яуын-бысраҡтар башланғас ҡына, ғәрәсәттән һуң яйлап тына барған даръя тулҡындары шикелле, сапҡы-ороштар аҙая һәм һүлпәнәйә төштө. Батша манифесы, генерал-губернатор приказдары үҙенекен итте: бола һүрелеүгә, һүнеүгә ауышты.

Сентябрь урталарында, мосолмандарҙың зөлхизә айында Башҡортостан төньяғында, Танып, Тулва буйҙарында иһә бола тамам баҫтырылғайны инде. Уға ҡатнашы булған кешеләрҙе эҙләү, эҙәрлекләү эштәре ҡыҙҙы, хөкөм-язалар әҙерләнде.

Боланан һуң гөрзәһө, халыҡтың үс-асыуы ташҡан айҙарҙа командаһында ыҙалана-шыртлай отрядтар туплап оҙата яҡкан Яныш старшина Гәйнәлә, үҙ яҡтарында хәүеф-хәтәрҙәр һүрәнәйгәс, ғәйеплеләрҙе эҙләү-тотоуға ең төрөп тотондо. Унын көнө килде. Уға, мишәр старшиналарының “иң яҡшылары” иҫәбендәге кешегә, генерал янаптары ҡаршыһында үҙен тағы шәберәк танытып ҡалырға кәрәк ине.

Теге саҡта, 1748 йылды, бола ҡубарырға булашҡан мишәрҙәрен һатып, күмәртәләп тоттороп, генералдан рәхмәтен дә, бүләген дә алғайны ул. Аҙаҡ түрәһенә-караһына төрлөсә ярау яғын да ҡайғыртты. Теше үткерләнгән бүре кәрәк мәлендә ҡойроҡто әле уңға, әле һулға борор төлкөләй ҙә ҡыланды. Дошмандарынан үс-ҡоһорон алыр саҡ килде уға.

Төп маҡсаты — ата фетнәсе Батыршаны тотоу. Яныш бында үҙ ғәйебен дә тоя: ҡулында саҡта эләктермәне, ауылдаштарынан шөрләне, мәлғүнгә ҡасып китергә юл ҡуйҙы, инде үҙен аҡларға, тотоп бирергә тейеш. Тотҡанға мең һум ярлыҡаш тәғәйен – уныһы эсте тишмәҫ. Шуға эйәреп үҙенә исем-заты, затлы бүләктәре килер. Һәр хәлдә, Яныш Ғабдулла улы үҙенең кемлеген ил-ғәләм алдында ныҡлап танытмай

ҡалмаҫ. Ошоно ҡулдан ысҡындырһам, исемем Яныш булмаһын – старшинаның эсенән үсәп, ҡыҙмаса саҡтарында хатта телдән дә ысҡындырғылаған уй-ниәттәре ине был. Кемгә-кемгә, баш бирмәҫ Батыршанан ил алдында үсен алып рисуай ҡылмаҡ, шуның башын ашамаҡ, үҙенә дан-шөһрәт яуламаҡ уға важип. Яҙыры, тәғәйене шул – быныһы нәҙер кеүек һүҙе ине уның.

Самалай ине Яныш: Батырша был тирәнән әллә ҡайҙа йыраҡ китмәгәндер. Төпкө урмандарында ғына ҡасып ята инде ул. Ҡамарға, оло юлдарға ҡарауыл ҡуйырға, һағаларға ғына кәрәк. Бер сыҡмаһа, бер сығырҙар. Оҙаҡ ҡасып-боҫоп ятырға, ҡышҡы өңөнә инер айыу түгел. Аслығы, һыуығы тик ятҡырмаҫ. Ғаиләһен, балаларын, сабыйын көҙгө урманда күпме аҫрамаҡ мөмкин. Шәкерттәре лә оҙаҡ сыҙамаҫ. Ҡабырҙар ҡулға – өҙөлөп төшкән алма шикелле эләгерҙәр, биллаһи ғазим.

Самалағаны хаҡ ине. Тәүге көндәрҙән үк Ибраһим менән Мирәхмәт тигән шәкерттәре тотолдо. Улары ҡасып Үреш ауылына ҡайтҡайнылар – шунда эләктерҙе старшина. Батыршаларҙың Бөрөбаш урманында йәшеренеп ятҡанын тәғәйен белде хәҙер. Тимәк, ул урманды уратып тәрәшләргә ҡала. Былай булғас, ҡасҡындар ҡулда тигән һүҙ. Күҙ яҙҙырмаҫҡа, усҡа төшөрҙө, ысҡындырмаҫҡа ғына.

Көҙгө һыуыҡтар башланыу менән ғаиләһе килеп ҡулға төштө. Сөләймән старшина командаһының сиреүле мишәрҙәре тотоп килтерҙе. Ҡарыш ауылдарына, Яныш старшина ҡулына. Ефете Зөлбохар үҙе, бер улы, ике ҡыҙы, йәнә ҡәйнеше Мостафа шәкерт — йәмғеһе биш йән ине улар. Былары тос табыш – ғаиләһе ҡулында икән, хужаһына ла күп ҡалмаҫ.

Һорау алғанда Зөлбохар старшинаға аруҡ мәғлүмәттәр асып һалды. Бөрөбаш урманында бер ай ҡасып ятҡандар. Унан ағас ҡырҡыусы сирмештәр өҫтәренә килеп сығып, Батырша менән шәкерттәре алыша-атыша ҡасып киткәндәр. Ат-фәләндәре, ҡышҡы кейемдәре юҡ икән. Әле лә шул урманда булырға тейештәр.

Старшина тәфтиште бүнәтәйҙәр менән, һәр һүҙен писаренән яҙҙырып, аҙаҡ раҫлар тамғаларын һалдырып, шартына килтереп эшләне. Үҙенә кәрәген айырыуса төпсөп һорашты, тураһын әйтһә, хәлдәрен еңеләйтергә вәғәҙәләр бирҙе.

— Ирендең яман юлға төшкәнен күреп-белеп торғанһыңдыр ис, ниңә үҙенә шуны аңлатманың йә миңә килеп әйтмәнең? – тип һораны Яныш.

— Бер ни белмәнем, белгертмәне һис тә, – тип яуапланы Зөлбохар.

— Гәйнәнән йортоғоҙға килгән кешеләрҙе лә күрмәнеңме ни?

— Күрмәнем.

— Мәрәҫем ауылы Ғайса улы Маҡсудты, Ислам улы Ырыҫҡолдо ла күрмәнеңме?

— Улар ни, Маҡсуд менән Ырыҫҡол, бер-ике мәртәбә булды шикелле. Маҡсуды бер кисләтә килде.

— Ни һөйләштеләр?

— Улар тышта һөйләште – ишетмәнем. Унан мәсеткә намаҙға тип киттеләр. Мин балалар менән ул кисте келәткә яткайным. Үҙе бер аҙҙан ҡайтты. Ҡунағы юҡ ине. “Маҡсуд ҡайҙа?” тип һораным. “Ҡайтып китте”, тине. “Ни йомош менән килгәйне?” тип һораным. “Уныһы нимәгә ул һиңә. Былай, үҙ эше менән генә”, тине.

— Ирең урманға бергә ҡасыр булырҙы ҡасан вә ни өсөн тип аңлатты?

— Шул Маҡсуд килеп киткәндән әллә аҙна тирәһе үткәс, әллә әҙ генә күберәк, йома көн иртүк китергә әҙерләнергә ҡушты. Ат екте лә, балаларҙы, үҙемде арбаға ултыртып, кәрәк-яраҡ әйберҙәрҙе тейәп юл сыҡтыҡ. “Гәйнә иләүенән ғәскәр килә, беҙҙе тотмаҡ өсөн, ҡасырға кәрәк”, – тип аңлатты.

— Унда кемдәр килерен, ни өсөн тоторға килгәндәрен әйттеме?

— Юҡ.

— Һин, ана кеше, ваҡ балаларың, имсәк сабыйың менән урманда ҡараҡтар кеүек йәшәрбеҙ тип уйланыңмы ни? Ниңә разыйлыҡ ҡылдың?

— Минең разыйлыҡҡа ҡарап торҙо ти ул. Әйтте, ихтыярһыҙлап алып китте. Барғас, беҙҙе балалар менән ҡайтар, тип ялбарҙым – яҡын да килмәй. “Һәммәбеҙ ҙә үлергәме? Унда мине тотторорғамы?” – ти. Шулай йәшәнек инде өшөп-туңып, асығып-ҡырҡылып, бер ай буйы серәшеп. Бер заман ҡыуышыбыҙға яҡын кешеләр килеп сыҡкайны, имсәк баламды күтәрҙем дә, бүтәндәрен эйәртеп, ҡаршыларына барҙым. Шәфҡәттәренә, падишаһыбыҙ мәрхәмәтенә ышанып, алданған балалы ананы ғәфү итерҙәр әле тип. Әхүәлебеҙҙе төшөндөләр. Ирем шәкерттәре менән ҡасып китте, тота алманылар. Аттары, әйберҙәре ҡалды ятып. Яныш аға, үтенеп һорайым: мин ваҡ балаларым менән үҙ иркем илә ҡотолдом. Һинең мәрхәмәтеңә күҙ төбәп ҡайттым. Балаларым хаҡына ярлыҡай күрсе, зинһар, ағатасым!

Зөлбохар быларын, үтенестәрен алдан уйлап, һәр һүҙен ятлап тигәндәй алған, ахырыһы, йыуаш, йомоҡ бисәнең теле аҙағына асылды китте. Ябыҡ һарғылт йөҙҙәре яҙылыбыраҡ, ялбарыулы тилмереш күҙҙәре ялтырабыраҡ китте хатта.

— Ярлыҡау минең ихтыярымда түгел, киленкәй, – тине Яныш. – Булһа, балаларың хаҡына, эйе, йәшлегең өсөн ғәфү итер инем... – теле йомшарып, күҙе осҡонланып алды муттың, әммә йомшаҡлығын шундуҡ баҫты, тауышы йәнә үҙгәрҙе. – Боласы ҡараҡ, падишаһыбыҙ дошманы ҡатыны булыуың, бергә урман ҡасҡаның өсөн хөкүмәт ҡарамағына бирмәй сарам юҡ, эйе. Ә үҙ ихтыярың менән сыҡҡаныңды, үтенесеңде түрәләргә еткерермен. — Яныш старшина Зөлбохарҙың ни саҡлы дөрөҫ вә ихлас һөйләүен йәнә һынамаҡ булып, тағы бер һорау биргән булды: — Ауылдан ҡасып киткәндә нисәү инегеҙ? Шәкерттәренән кемдәре теләп үҙҙәре эйәрҙе?

— Сыҡҡанда ун ике шәкерт тә беҙҙең ғаилә ине. Кемдәре үҙҙәре теләп эйәргәнме-юҡмы — уныһын әйтә алмайым. Шәкерттәре кемдәрме? Уныһы, ни, үҙегеҙгә мәғлүмдер инде.

— Шулай ҙа.

— Кемдәрме?.. Ғәбделлатип, Ғәбделғариф, Яхия, Ҡасим, Ғәбделкәрим, Шәриф, Сәфәр, Мөслим, Мирәхмәт, Ибраһим, Дәүләтбай... Нисәү? Ун икеме?

— Юҡ. Ун бер генә.

— Ун бер... Кемде оноттом һуң? Ә-һә! Үҙебеҙҙең Мостафа ҡалған. Әгәр уны беҙҙең ғаилә иҫәбенә индермәй, шәкерт һанағанда.

— Батырша янында хәҙер нисә шәкерте ҡалды?

— Өсәү генә.

— Кемдәр?

— Яхия, Мөслим, Сәфәр.

— Былары хәҙрәттең иң яҡын күргән шәкерттәреме инде?

— Әллә инде. Иң олораҡтары, бар эш-йомошон эшләгәндәре шулар ине.

— Ҡалғандары нисек, ҡасып, таралып бөттөмө ни?

— Башта уҡ, урманда бер кис ҡунғас та, ахырыһы, Ибраһим менән Мирәхмәт ғәйеп булды. Әллә аҙаштылар микән, тип уйлағайныҡ, ҡасыуҙары шул булды, күрәһең. Бер ай тирәһендә Дәүләтбай ҡайҙалыр айырылып ҡалды. Унан хәҙрәттәре биш шәкертен – Ғәбделғафарҙы, Ғәбделлатипты, Ғәбделкәримде, Ҡасимды, Шәрифте – аҙыҡ-түлек алырға тип ебәргәйне, улары әйләнеп килмәне.

— Ҡасан ебәргәйне был бишеһен?

— Ике аҙна артҡандыр, моғайын.

— Ҡайһы ауылдарға ебәргәнен әйттеме?

— Юҡ. Мин ишетмәнем. Һөйләмәнеләр ҙә. Һорашһам да – миңә әллә ышанмайҙар йә бисә кеше итәләр инеме – бик һөйләп бармайҙар ине.

Старшиналары Зөлбохарҙың йәшермәй рияһыҙ һөйләүенә ышана барҙы – күп әйткәндәре үҙҙәренә мәғлүмдәренә тап килә. Бәс, биш шәкертенең китеүе лә раҫ. Тик бына ҡайҙалар? Йыраҡҡа китеп олаҡмаһалар, эҙләргә, табырға кәрәк. Быныһын белгән яҡшы. Тағы ни белешергә?

— Батырша менән ҡасып киткән өс шәкерттең, хәҙрәттең ҡоралфәләндәре бар инеме? Ҡышҡы кейем-һалымдары нисегерәк?

— Кейемдәре еңелсә инде. Үҙенең өҫтөндә йылы бишмәт. Йәйәһе, ун бишләп уғы бар ине, атышҡанда атып бөтмәһә. Яхия камзулда ғына, йәйәһе бар, шунса ун биш уғы бар ине шикелле. Мөслим менән Сәфәр өҫтөндә йоҡа сәкмән, ҡорал-фәләндәре юҡ. Ҡайҙа уларға ҡараҡ булырға, йүнле ҡорал-яраҡтары ла юҡ, яланғас Хоҙай бәндәләренә.

— Зөлбохар килен, улар ҡараҡ ҡына түгел. Алай ҙа, ат-мал урлап һуйып, ҡара урманда ашап ятҡан әҙәмдәр кем була һуң? Ат ҡараҡтарынан яманыраҡ улар, эйе. Шуны бел: падишаһыбыҙға ҡаршы халыҡ-

ты ҡоторҡан ил дошманы, дәүләт буры ул ирең, ә шәкерттәре – эйәрсен иштәре.

Иренән бигерәк шәкерттәрен ҡыҙғанып һүҙ ййланы Зөлбохар яҡлабыраҡ.

— Һи-и, шәкерттәре инде, остаз хәҙрәттәре һүҙен тыңламай булдыра алмағандарҙыр, бисаралар. Алашаға эйәргән тайҙар улары. Ә бына үҙенә, имам, мөҙәрис хәҙрәт булған оло кешегә, ни етмәгәндер, хоҙауәндә?! Былай – үҙем дә ишеттем – шәкерттәрен ике-өс мәртәбә иҫкәртте ул: “Һеҙ минең монафиҡтарға ҡаршы был уҫал эшемдә һәргиз белмәнегеҙ. Һеҙ йәш уғландар. Ирекһеҙләп алып киттем үҙегеҙҙе. Бында мин ғәйепле, һеҙ биғәйеп. Яҙығы миңә булыр. Әле һуң түгел, кире ҡайтығыҙ ауылға! Һеҙгә, талиптарға, һис ни булмаҫ”. Ә улар: “Беҙ ҡайтырға ҡурҡабыҙ, тотоп баструк ябырҙар. Хәҙрәт, беҙ һинең менән ҡалабыҙ”, – тинеләр.

— Нишләргә һуң самалары? Әллә шул урманда ҡышларғамы, йә берәй яҡҡа китмәкселәрме? – иң кәрәк һорауын бирҙе Яныш.

— Ошонда ғына ҡышлайыҡ, тиҙәр ине. Бер Себер юлына, Көҙәй йорто тарафына сығыу хәйерле, тигән һүҙҙәрен ишетеп ҡалдым. Нишләрҙәр?..

Был тура яуапты ишеткәс, старшинаның йөҙө асылып киткәндәй булды.

Тағы үҙе ҡыҙыҡһынған байтаҡ нәмәләрҙе һорашты әле старшина. Әллә йәш балалы ҡатын-ҡыҙ кешенең ауыр хәлен аңлап, әллә үҙ күрһәтеп телен асырға тырышып, тотҡоно Зөлбохар менән Яныш былай йомшаҡ һөйләште, үҙен дә, балаларын да ҡыҙғанды буғай. Әммә ләкин һуңғы һүҙе ҡоро һәм ҡаты ине: “Падишаһыбыҙҙың яуыз дошманы тип иғлан ҡылынған вә һәм тотҡан кешегә ярлыҡаш тәғәйенләнгән әҙәмдең ғаиләһен мин Өфөгә, провинса кәнсәләренә илтеп тапшырырға бурыслымын, эйе. Иртәгә үк юл сығылыр. – Быны үҙе шулай теләгәндән түгел, мәжбүриәттән икәнен аңлатҡандай: — Губернатор бойороғо шулай”, – тип өҫтәне. Ярай әле бисараларҙың хәленә инеп, өйҙәренән ҡышҡы кейем-һалымдарын алырға, йорто менән хушлашырға рөхсәт итте, балаларын ҡайҙалыр һалҡын келәткә яптырып ҡуймай, старшина үҙ йортонда ҡундыртты, йылы ашын, йоҡлар урынын бирҙе – шуныһына ла рәхмәт. Яныш ауылдаштары ҡарғышынан, имсәк балалы әсәнең күҙ йәше, күкрәк һөтө төшөрҙән дә шикләнгәндер – ул да әҙәм балаһы.

Был допрос һәм Зөлбохарҙың балалары менән Ҡарышта һуңғы төн ҡуныуы һижриҙең мең дә бер йөҙ алтмыш туғыҙынсы сәнәһе, мөхәррәм айының һигеҙенсе көнөндә, йәғни милади 1755 йылдың 3 октябрендә ине.

Иртәгәһенә, 4 октябрҙә, Зөлбохар ете йәшлек улы Тажетдины, өс йәшлек ҡыҙы Зөләйхаһы, имсәк балаһы Сәлихаһы менән ҡарауыл аҫтында ылауҙа Өфөгә оҙатыла. Батырша ғаиләһенең, дарьяға ташланған таш кеүек, туған Ҡарышы менән мәңгегә айырылыр, исем-

есемдәре, хатта хәбәр-хәтерҙәре лә юйылыр, зымзыя юғалыр көндәре икәнен әсәләре уйланы микән? Килен төшкән ерендә таш булып ҡатып ҡала алһа икән дә һуң! Тыуған тупрағы йә һабаҡ алған, эҫенгән йәркәйҙәре, үҙ балаларын сит-ят ерҙәргә һибеп ебәрергә теләмәгәндәй, шулай төркөмләп йәиһә берәм-берәм үҙенә тартып ҡайтарып та ихтыярһыҙҙан тотолорға, аҙаҡ ҡайҙалыр мәңгегә олаҡтырылырға сәбәпсе була тормаһасы.

Ҡасҡандарына бер ай тулып уҙғанда Дәүләтбай атлы шәкерте Батырша хәҙрәте янынан йырылып, урмандарҙа аҙашып йөрөй-йөрөй, Ҡариҙел буйы Байҡы ауылына килеп тотола. Ҡулға алынып, Елдәк ҡәлғәһенә ебәрелә, аҙаҡ Өфө төрмәһенә оҙатыла. Шул уҡ октябрҙең тәүге аҙнаһында Сәфәрғәле шәкерт Ҡарышҡа ҡасып ҡайтып, Яныштың үҙ ҡулына эләгә.

Октябрь урталарында Себер юлы Серек тигән башҡорт ауылына әлеге биш шәкерте, үҙҙәре әйткәнсә, үҙ ихтыярҙары менән килеп йәүкә яһай. Уларының хәҙрәттәренән айырылыуына өс йома самаһы икән. Ниәттәре үҙ аяҡтары менән Өфөгә етеп, оло түрәләрҙән ғәфү үтенергә, ярлыҡау һорарға, имеш. Серек ауылынан улар Ҡарышҡа килтерелгән һәм Яныш старшина ҡарамағына тапшырылған. Шулай итеп, былары ла Ҡарышта Яныш иләгенән үткән.

Алма беш, ауыҙыма төш, тигәндәй, көтөп кенә ятып ғаиләһен, шәкерттәрен еңел ҡулға төшөргән Яныш ата боласының ҡаты сәтләүек булырын баһалап етмәй ине әле. Былай баштан уҡ ҡаты тотонғайны инде ул Батыршаны тотмаға. Килеп торған фарты бар, әйткән һүҙе бар – тотор! Тотҡандарҙан алған яуабын, эҙләүҙәге һәр сараһын, аҙымын дүрт-биш көн аша өйәҙ, губерна түрәләренә рапорт итеп бәйнә-бәйнә еткерә тора үҙе. Белһендәр: кем тынғыһыҙ эшләй ҙә, кем көн-төн кешеләрен йүгертә, өҙләкһеҙ эҙләтә. Берҙе биш итеп күрһәтергә, самаһыҙ шапыртырға тигәндә лә Янышҡа ҡуш.

Беренсе сентябрҙә Батыршалар Ҡарыштан сығып киткәндә үҙ йортонда боҫоп ҡалған Яныш үҙенең ҡурҡаҡлығын, тоторға бер ни әмәл ҡылмағанын йәшерер өсөн Бөрө приказына шул уҡ көндө яҙған рапортында: “Мындағы Ҡарыш ауылының мулла Батырша Ғәли үҙенең янындағы шәкерттәре берлә сыҡдылар йортондин. Ул мулла Батыршаны ҡыуып ебәрҙем тотар өсөн” – тип аҡҡа ҡара менән яҙа. Ғәжәп: ”ҡыуып ебәрергә тотар өсөн”. Бесәй сысҡан менән уйнай тиерһең. Үҙе ҡыуа, үҙе тота, йәнәһе. Икенсе көндө Өфөгә ебәргән рапортында иһә, Батыршаны ике йөҙ кеше менән урманда эҙләйбеҙ, тип хәбәр һала. Өсөнсө көнгө рапортында ул һан өс йөҙгә етә. Ауылдаштары үҙ күҙҙәре менән күреп торҙолар шул Батыршаны нисек ҡулынан ысҡындырғанын, үҙе ҡурҡып боҫоп ятыуын. Хәҙер аҡланырға, ҡағыҙҙа түрәләр алдында шапырынырға кәрәк уға.

Буш ҡалған йорт-ихатаһынан Батыршаның өйөн тентетеп, әйберҙәрен, кәртәләге малдарын алдырта старшина. Шуларҙан хәҙрәттең ниндәйҙер яҙыуҙарын, һаҙаҡлы бер йәйәһен, алты баш йылҡыһын –

“ҡара дүнән, йәнә бурыл ҡонан, йәнә саптар айғыр, йәнә туры алаша, йәнә быуаҙ бейә, йәнә туры атты” ғына яҙған рапортындағы исемлеккә индерә. Ҡалған йорт-йыһазын нишләткәндер – билдәһеҙ (Зөлбохар әйткәнсә, ат малы иҫәбенә ҡарағанда ла хужаға шөкөрана итерлек булған икән шул. Инде йорт-ерҙәре, мал-мөлкәте һәммәһе тәләф).

Яныш Батыршаны тотошоуҙа күрше әшнә старшиналарына иҫәп тота. Улары тотһалар, башта Яныш ҡулына тапшырырға тейештәр – үҙ-ара һөйләшкән шарттары шул. Батыршалар ҡасып ятҡан ҡара урманды ла хәҙер бер кейек-маҙар үтеп китмәҫлек итеп уратып алғандар. Йәтмәләре ышаныслы. Инде көндәр һалҡын. Оҙаҡламай ҡышы килер – ҡайҙа бара улар ҡара урманда аҙыҡ-түлекһеҙ, йылы кейем-һалымһыҙ. Йәтмәнәрәтәләренә эләгәсәк барыбер. Үҙенекенә һуғылмаһа, бүтәндәр тотоп бәйләп килтерәсәк уға. Бындай уй-ниәттәрен Өфө приказына яҙған рапортында ла ысҡындырып ҡуя. “Ошбу мең дә ете йөҙ дә илле бишенсе йылда зөлхизәнең бишенсе көнөндә вур Батырша шәкертләре берлә йортиндин урманға ҡасып сыҡкандин һуң хеҙмәтле писарь Кузьма Уразлы уғлы мулла Исмәғил Рәжәп уғлы берлә ул вур Батырша Ғәли уғлының һис тә үк ҡотолмаҫлығына сәбәп улмаҡ фекерне ҡылып, дүрт юлға да яҙыулар йөрөтөп яр иткән ирдем, – тип яҙҙы ул, мәҫәлән. – Ул вур Батырша Ғәли уғлын шәкертләре берлә һәр кемләр осратһалар тотһонлар, бәйләп килтерһенләр миңә, Өфөгә ебәрер өсөн, дийү”. Ул үҙен, күрәһең, күптәргә  баш старшина итеп тә тоя. Өфө, Ырымбур түрәләре менән әшнәлеге ҙур шул, үҙен таныта белгәс. Буштан килгән аҫыл малдар түрәләргә һеңә, шуға һүҙе үтә, ҡул ҡулды йыуа. Әлеге рапортында ул йәнә шулай ти: “...Ул вур Батыршаны шәкертләре берлә эҙләр, тотар өсөн Өфө приказындин указ бирелергә тейешледер. Әлбиттә, үҙем, писарь Кузьма Уразлы уғлы, мулла бойорһа, шәйад тотолор дийү өмид итәмеҙ...1755 йылда мөхәррәмнең ике ҡыҙы, бер уғлы, ҡайныһы Мостафа Хөсәйен уғлыны, шәкерте Сәфәр Жәғәфәр уғлыны һәм дапруслары рипур берлә ебәрелде минең каманданың Ҡарыш ауылының сиреүле мишәрләр Абуҡай Киләкәй уғлы юлдашлары берлә Өфө приказына тапшырыр өсөн. Шул уҡ 1755 йылда мөхәррәмнең 9 көнөндә”.

Писаре Кузьма менән Исмәғил мулла ҡарамағындағы 200 кешелек командаһы икенсе ай эҙләй инде Батыршаны. Бөрөбаш урманын тезелешеп тәрәшләй һөҙә үтеп сыҡтылар – юҡ та юҡ. Әллә ергә һеңделәр, әллә йырылып ҡастылар инде, хәйерһеҙҙәр. Ҡаты уйға сумды Яныш: ысҡындылар микән ни? Ары ҡайҙан эҙләргә? Күҙәй йортона китмәксе тигәйнеләр – әллә былары юл яҙҙырыр өсөн һөйләнгән һүҙме икән? Ҡарт бүре дөрөҫөн әйтер тиһеңме ышанысһыҙ юлдаштарына. Китһә, ҡай тарафҡа юлланыуы ихтимал? Үҙе йәш сағында һабаҡ алған Ҡазан өйәҙе тарафынамы, әллә имамлыҡ ҡылған Исәт провинцияһынамы, ҡоҙаһы Мөслим старшина ҡанаты аҫтына?.. Һорауҙар, һорауҙар – баш тубал булырлыҡ. Тубыл өйәҙенә лә сығыуы бар, шул

яҡтарҙа ла дуҫ-иштәре күп тигән һүҙ йөрөй. Йырылһа, дүрт яғы ҡибла, яуыздың.

Ҡыш башланыуға шул фекергә килде – Ҡазан өйәҙенә, Исәт провинцияһына, хатта Тубыл тарафына саҡлы ҡыҙырым кешеләрен ебәрергә. Был юлы Өфө өйәҙ, Ырымбур губерна түрәләре менән хатлашып, былай һөйләшеп, ҡаҙнанан прогон, ылау, бүтән юл-сығым хаҡтарын ҡаплатырға ризалыҡтарын алды. Ҡышын ауыр оҙон юлға түҙем кешеләрен тапты. Ҡазан тарафына Мөгликүл ауылының муллаһы Исмәғил Рәжәп улын, Исәт провинцияһына Тимкә ауылы Нияз Ғәбдессәләм улын, Тубыл өйәҙенә Зәйнетдин мулла Зәйниғәбидин улын иптәштәре менән юлланырға күндерҙе. Мулланы муллалары тапмаҡсы. Ноябрь урталарында, мөхәррәмдең 12 көнөндә, Батыршаны тоторға һәр яҡлап ярҙам итергә әҙерлек тураһында Санкт-Петербургтан ҡеүәтле Сенаттың үҙенән мөһөрлө ҡағыҙҙа указ килеп төшөүе лә дәрттәренә фарманлы дарман өҫтәне. Китеүселәргә урындағы чиновниктар менән ҡаты һөйләшер өсөн батша манифесының ташҡа баҫылған даналарын таптырып тотторҙо.

1755—1756 йылдарҙың ҡышы менән яҙында Яныштың төрлө тарафтарға ебәрелгән эҙәремселәре ыжғыр һыуыҡта, юлдар өҙөгөндә, иҫ киткес ыҙалар сигеп, йән ҡыйып (араларында ҡайһылары юлда ауырып, туңып үлеп тә ҡала), мең михнәттәр күреп ҡыҙырып эҙләүҙәренә ҡарамаҫтан, осоҡ ҡына ла осо-фәләне беленмәй – Батырша юҡ та юҡ, ғәйеп тә ғәйеп. Мишәр старшинаһының “эшкенәһе” лә өйәҙгә ай һайын буш рапорттарынан ғибәрәт.

Еңел генә эләктермәксе ине, тот ҡапсығыңды! Ер тишегенә керҙе, даръяға баттымы икән ни хәйерһеҙ йән. Иҫән түгелдер, үлелер ул, юғиһә, бер эҙе-хәбәре беленер ине нисек тә. Уйҙары шулай хафалы, үсәүле ине Яныштың.

## Иҫән ине Батырша

Иҫән ине Батырша! Иҫән! Эҙһеҙ юғалыр заттан түгел ине ул.

Хәйер, хәҙергә уға эҙһеҙ-хәбәрһеҙ йәшәгәне хәйерле.

Ҡоралды урмансыларҙан ҡотолғас, хәлдән тайыуҙарына, эшлектән сығып йонсоуҙарына ҡарамаҫтан, ҡалын урмандар эсләй, әрәмәле кескәй йылғалар, һыҙағайындар буйлай, кеше аяҡ баҫмаҫ һилүәт ерҙәрҙән тағы бер тәүлек үтте улар. Аяҡтары табаланып, бер аҙым атларлыҡ хәлдәре ҡалмағас ҡына ергә ауҙылар. Тормаҫҡа ауғандар ине, сыйылыпйәрәхәтләнеп бөткән бит-кулдарының, бөтә тәндәренең тәкәт тотҡоһоҙ һыҙлауын тойҙолар. Өҫ кейемдәре йыртылып-теткеләнеп бөткән, күтәргеһеҙ лысма еүеш, бысраҡ. Өҫтәүенә, ас тамаҡтарына тәғәм ризыҡтары юҡ, ут яғырға ҡурҡыныс – күреп-һиҙеп ҡалыуҙары бар. Арттан һаман баҫтырып киләләр, эләктереп алырға торалар кеүек уларға. Һәр өнауаз, хатта тынлыҡ үҙе тертләтеп шом һалған төҫлө. Тағы бер ун саҡырым, ун аҙым булһа ла хәтәр-хәүефле төбәктәрҙән алыҫыраҡ ҡасыр-

ға ине лә һуң, хатта ки имгәкләп, шыуышып тигәндәй... Ләкин йүнле уйланырға ла өлгөрмәнеләр, һыҙланған тән-бәдәндәре ойоп, ҡан тамырҙары һулҡылдашып, ҡапыл йоҡоға талдылар. Йоҡо, һаташ ҡатыш күпме баҫлыҡҡандарҙыр, ҡырпаҡҡа ҡапланған урман һалҡыны, таң һыуығы тишек-тошоҡ еүеш кейемдәре аша үтеп, тәндәрен тамам шыҡырайтып, өшөп-ҡатып уятмайынса нишләһен? Бер талай онотолоп торған шыҡһыҙ донъяға ҡайтҡандарын, һыуыҡтан шыҡайып ҡатҡандарын тойоп күҙ асҡанда, йөрәктәрен йәнә шом бөрөштөрҙө: ҡайҙа ятalар? Уратмағандармы?.. Йәһәтерәк ысҡынырға! (Ҡурҡҡанға һаман ҡуш күренә).

Ҡалтырап ҡорошҡан тәндәрен ауырлыҡ менән яҙып, аяҡтарын саҡ-саҡ һөйрәп, тағы ҡуҙғалдылар таң тишегендә. Бар уй-өмөткенәләре кеше-ара торғансы Ағиҙелгә етергә, нисек тә имен-аман сығып ҡотолорға ине.

Тоҫмаллағандары дөрөҫ икән, Иҙелгә яҡын туҡталғандар – тиҙ еттеләр. Текә яр башынан күрәләр: аҫта, ҡараңғылы-яҡтылы ҡарайып, һалҡын бөркөп, ҡурғаштай ваҡ тулҡындарын шыбырҙата-сайҡата юлдарын бүлеп ята Ағиҙел. Яр ситтәрен боҙ ҡаплаған.

Ағиҙел буйлап әллә күпме барып, бер ишкәкһеҙ кәмә йораты табып, шулай мең бәлә менән арғы яҡҡа аяҡ баҫтылар. Баҫҡан ғына, ярға менеп тирә-яҡтарына баҡҡан ғына инеләр, ҡапыл ҡандарын ҡыҙҙырып, йөрәктәренә йылы йүгертмәһенме: бар ҡурҡыныс, ҡыуғы даръя кисә алмай, Ағиҙел аръяғында бүленеп ҡалды былай булғас. Хоҙайына шөкөр, бәндәһенә ҡеүәт. Уларҙы Танып, Гәйнә, Ирәкте иләүҙәрендә һәр ерҙә танып-белеп торһалар, был яҡта – йыландар, йәнәйҙәр иләүҙәрендә, көнбайыш башҡорттары араһында – белеүселәр ҙә, эҙләүселәр ҙә булмаҫ. Ил ҡыҙырып үтер юлаусылар булып һеңерҙәр, тереклек итерҙәр ине әле. Ил эсендә сәпсек тә үлмәй.

Бәндәнең һөйөнөсө менән көйөнөсө лә бергә шул, саҡ тын алған, иркенләп ҡалған инеләр, ҡыҙыу ишеп, төрлөсә ҡауҙарланып, кәмәлә йылынып, хатта тирләберәк киткән саҡтарынан ярға менгәйнеләр, тик тороуҙан, йәнә һалҡын елдән кинәт өшөп, ҡорошоп барғандарын шәйләнеләр. Икенсе тәүлек тәғәм ейməүҙәре ашҡаҙандарын тырнарға тотондо. Яр башында былай тораташтай ҡатып торорға ярамай, тереклек хәстәрен күрмәк хәжәттер. Ҡайҙа бармаға, ни ергә морон төртмәгә, ҡалай ризыҡ еймәгә – шул бер үк һорауҙар баштарын борғосланы хәҙер. Башта ут яғып йылынайыҡ, өс-башты кипшендерәйек тиһәләр, кеҫәләрендәге ҡыуҙары еүеш, саҡмалары сағырлыҡ түгел. Берәй йылы урын, әҙәм заттарын эҙләмәй әмәлдәре юҡ хәҙер. Иҙел буйлап ауылдар яҡындыр ҙа, барып инеүе хәтәр. Тотолоуың шул булыр. Әмәленең ғәмәле ти, йән биргәнгә берәй йүн бирһәсе Хоҙайҙары – хәрәкәтләнмәк кәрәк.

Киттеләр тағы урман эсләп баштары һуҡҡан яҡҡа. Урман – ҡолаҡ, көҙгө һалҡын һауала тауыштар аулана, күп ара үтеп, бер эт өрөүенән юллай килә урмансымы, умартасымы өйөнә юлыҡтылар – кисләтә интегешеп. Иллеләр тирәһендәге мосолман ағайы шик-шөбһәһеҙ ҡабул

итте мосафирҙарҙы. Кемлектәрен һорашып-нитеп тормай, хужа сыуалына утын өҫтәне, аш-һыу әҙерләргә кереште. Ул арала ҡунаҡтары кейемдәрен һалып киптерергә, йылынырға усаҡ тирәһенә йылыштылар. Һүҙҙәр ара-тирә аңлашыуҙар, ым-ишаралар менән сикләнде. Хужа күреп тора юлаусыларҙың ни хәтле йонсоғандарын, бөтөрөнгәндәрен. Саҡ торған йәндәрҙе ныҡышып ыҙалауҙа ни мәғәнә. Йәнә улар йолаһынса, хужа үҙе һорашырға түгел, ҡунаҡтары үҙҙәре әйтергә тейеш кемлектәрен. Оло мосафир ҙа хужа ҡылығынан аңлай ҡуйҙы – был йыландар ырыуынан аҫаба башҡорт булырға тейеш.

Алдарына ҡайнар аш, ашамлыҡ, кәрәҙле бал килеп ултырғас та, эстәре аслыҡтан ни хәтле ҡырҡылған булмаһын, мосафирҙар аш-һыуға ҡапыл ябырылманылар, сама белергә, сабыр булырға тырыштылар, хужа ла артыҡ ҡыҫтаманы, һүҙ менән албырғатманы. Ашап туйыуҙары менән ял биреү, ятҡырыу яғын ҡараны ул сәйер ҡунаҡтарына.

...Инде күнегеп барған был ҡунаҡсыл йылы өйҙән, мәрхәмәтле умартасы янынан ҡуҙғалып китергә кәрәк ине барыбер. Юлсыларҙың, ауыр булһа ла, юлда булғаны яҡшы. Яҡшы бәндәнең үҙен хәүеф-хәтәр төшөрөнән дә арындырмаҡ хәйерле. Ул-был баҫылғанын көтөп, тағы бер аҙна яттылар ҙа, йома көн юлға йыйындылар мосафирҙар.

Сәмиғулла үҙҙәренә эҫенеп алған ҡунаҡтарын мөмкин тиклем өҫ-аяҡтарын бөтәйтеп, аҙна-ун көнгә етерлек ризыҡ-нәфәҡәләрен төйнәшеп, изге йәндәргә хәйерле юл теләп, ҡара урмандар аша байтаҡ ара оҙатыша ҡалды. Хызыр Ильяс булмаһалар, өлкәненең Батырша үҙе, йә шундай йән икәнлегенә инанғайны инде ул.

Аҙашып асамай юл сатына килеп сыҡҡан кеше хәлендә ине Батырша. Юл өс тарафҡа айырыла – ҡайһыһынан китергә? Ҡайһыһы уңдырыр ҙа ҡайһыһы туңдырыр? Әкиәт батырҙарыныҡы шикелле, юлын юрар күрәҙәсеһе, хаҡ юлға төшөрөр әүлиә булһа икән дә һуң. Хәйер, Батырша барыр юлын былай ҙа яҡшы белә, унығын хәл иткән. Юл өйрәтеүсегә мохтажлығы юҡ. Үҙе ун йыл уҡып ятҡан Ғабдрахман хәҙрәт тарафына, Бөгөлмә өйәҙе Надир командаһы ауылдарына етеп, әлегә йәшеренеп йәшәү ине ниәттәре. Әле шул юлдалар.

Быларынан бигерәк ҙурырағы, киләсәк яҙмыш юлдары ныҒыраҡ борсолдора Батыршаны. Хоҙайҙың яҙған тәҡдиренә күнһәң дә, әҙәмгә ижтиһад итмәй булмай. Өс ҡыйыу уй урала хәҙер уның башында. Береһе – Ҡараһаҡал шикелле ҡыр-ҡаҙаҡ далаһына ҡасмаҡ, шунда ҡасҡан башҡорттарҙы кире күтәреп, ҡаҙаҡтарҙы эйәртеп яу асмаҡ уйы. Хан-солтандары менән дә килешеп булыр ине, бәлки. Ул сағында алҡымынан алырҙар ине генерал-губернаторҙың. Саялығын үтә сая юл – быға үҙ батырҙары, айбарлылар кәрәк. Уға китһә, Әмин, Сураш, Хоҙайбирҙе ише ир-егеттәр аҙмы ни араларында? Башҡорттоң уҡ-һаҙағы, ҡаҙаҡтың һуйыл-найзаһы янында. Берләштереп булырмы? Тәүәккәлләгән таш ярған, ти. Таш ярмаһа, баш ярған булһа...

Икенсе юл – башты алып, мөһажир хәлендә ислам даирәһенә китмәк. Хиуа, Бохара хандары менән һөйләшеп, мөмкин икән, Иран шахта-

рына, төрөк солтандарына етешеп, нострат кафырҙарға ҡаршы йыһат астырмаҡҡа өндәмәк. Бөлдөрөп, суҡындырып бөтөрөп барған бисара мосолмандарын аралаштырмаҫтар инеме ни динебеҙ, өммәтебеҙ хаҡына? Татар, башҡорт тамам баҫтырылһа, ҡырғыҙ, нуғай, ҡарағалпаҡтар буйһондоролһа, һарттарға, төрөкмәндәргә, Хиуа-Бохараның үҙенә урыҫтың ҡаты ҡулы төшәсәген тояларҙыр ис. Ихтыяри сарбаз туплаһалар ҙа. Бер ҙә булмаһа, бер мөжәһид мулла башы мөьминдәре араһына һыйыр ине әле. Сит мәмләкәткә ҡаршы Аҡ батша ҡулы етмәҫ. Хәленсә йәшәп, раббыһынан гонаһтарына ғәфү үтенеп, намаҙлыҡ өҫтөндә генә ултырыр ине, яҙһа. Имкәне сыҡһа, Мәккәһенә үк юл тотор. Ҡасып киткән имам хәҙрәттәренә хажи булып ҡайтып төшһә, бәлки, ярлыҡауы килер. Мосолманға фарыз иң оло ғәмәлен – хаж ҡылыуын үтәмәге бар гонаһтарын юйыр, бәләләрҙән йолор әмәл булыр. Хажилығы өҫтөнә сардар ҙа булһа... Хыялдары оло, өмөткәйе бәләкәй шул әлегә.

Өсөнсө юлы ла бар: падишаһ хәҙрәттәренең үҙенә үк ярлыҡау үтенеп бармаға. Мосолмандарына төшкән һәләкәттәр вә бөлгөнлөктәр хаҡында, халайыҡтарының хәжәттәре вә зарилыҡтары тураһында падишаһымыз ғәзименә әҡләм итмәк вә аңлатмаҡ имкән. Мәликәбеҙҙе ғәҙел вә миһырбанлы тиҙәр. Бисара булып боҫоп киткән хәҙрәттәре падишаһҡа юлығып, ҡулынан алтын мөһөрлө ярлыҡау алған батыр булып ҡайтып төшһә иләүенә, танытыр ине яуыз дошмандарына, төрлө монафиҡтарға үҙенең кемлеген. Янышы ярылып үлер ине.

Күңел ҡошо ҡайҙарға осмай. Ғәмәле хәүефле, шикле шул. Кем үткәрә уны пайтәхеткә саҡлы, падишаһ һынлы падишаһтың үҙенә үк? Изге ниәтеңде әйтеп түрәләргә йәүкә итеүең менән тотоп бикләүҙәре шул булыр. Гонаһлы башыңды үҙ иркең менән тамуғына тығырһың. Уйлай-уйлай ҙа, береһенең дә осона сыға алмай туҡталып ҡала Батырша. Асыҡ ҡына ҡарарға килергә ғәйрәте етмәй. Етер ине – тәүәккәл дәрт-дарманы юҡ. Аптырағас, ни булһа, шул булыр, Аллаһы тәғәләнең тәҡдире ҡушҡаны булыр, тип, туғарыла ла ҡуя.

Уй-ҡайғылар ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөй. Ҡышы һалҡын, юлы ауыр, ә башты уйҙар ҡаңғырта. Юл аҙабы – гүр ғазабы, ниҙәр генә эшләтмәй.

Шулай умартасы өйөнән сыҡҡаны бирле төрлө уй-хыялдарға сумасума, ҡар яра-яра килгәнгә дүрт тәүлек тигәндә, оло ауылдарға инмәй урап үтә-үтә, кәбән-эҫкерт эстәрендә, урман төпкөлдәрендә ҡуна-тора, мең ғазап менән Зәй буйы Надир командаһы ауылдарына яҡынлаштылар. Батырша шәкерт саҡтарында йөрөгән, гиҙгән таныш яҡтарын күргәс, иркенләй китте, хәүеф-хәтәрҙе әллә ҡайҙа Ағиҙел арьяҡтарында аҙаштырып ҡалдырғандай хис итте. Инде лә әүәлге шәкертен кире ҡаҡмаҫ, ят итмәҫ әле Зәй буйҙары.

*(Дауамы киләһе һанда)*